✓ ***Беҙҙең үҙ-үҙебеҙҙе сикләүебеҙ ҡайһы саҡта оса алыуыбыҙҙы ла онотторға мәжбүр итә. Беҙ тормошобоҙҙо быяла кәртәләр менән сикләйбеҙ. Ижад иткебеҙ килә, әммә күҙгә күренмәгән төрмә һаҡсылары беҙгә: "Һин быны булдыра алмайһың. Был тормошҡа ашырлыҡ әйбер түгел. Көсөң етмәйәсәк. Бик ҡиммәткә төшәсәк. Кеше көлөр. Һин әлегә йәш әле. Ҡартайғанһың инде. Сәләмәтлегең насар. Быға ата-әсәйең рөхсәт бирмәйәсәк. Бик күп ваҡыт талап ителәсәк. Һинең кәрәкле белемең юҡ", - тип иҫкәртеп тора…***

***Джон Макс ТЕМПЛТОН.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2 - 8 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№27 (445)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бындағы дауалау ысулы -**

**һөлөк, ҡорттан саҡтырыу, үләндәр...**



5

**Телде өйрәнһәң...**

**Ҡытайға ла алыҫ түгел**



6

**Беҙ бәхетле халыҡ...**



8-9 "Урал батыр"ыбыҙ, ер кендеге Уралыбыҙ бар!

**Әүлиәләр ҡәберҙәренә...**



**табыныр өсөн түгел, хәйер-доға ҡылыр өсөн барабыҙ**

12-13

14 **ТВ-программа**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Наҙанлыҡтан... штраф түләп кенә ҡотолоп булырмы икән?

***Фирүзә Ишбирҙина, БР-зың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Башҡорт теле дәүләт теле булып иҫәпләнһә лә, уны ҡулланыу бар тулылығында ғәмәлгә ашырылмай. Телебеҙҙе һанға һуҡмау күренештәре тулып ята, үкенескә күрә. Был урамдарҙағы алтаҡталар текстарына ғына ҡағылмай. Республикабыҙҙа, мәҫәлән, тимер юл һәм автовокзалдарҙа әле булһа рейстарҙы башҡортса иғлан итеү йәйғә һалынмаған. Баш ҡалабыҙҙа ғына түгел, бәләкәй генә район үҙәге поликлиникаларында ла ауылдан килгән әбей-һәбейҙең йомошон ватаемерә урыҫса аңлатырға маташып интегеүенә шаһит булғаным бар. Хатта район хакимиәттәренең социаль яҡлау идаралыҡтарында, Пенсия фондының район бүлексәләрендә лә ошондай күренештәргә йыш тап булам. Бындай осраҡта хеҙмәтләндереүсе персонал телде яҡшы белгән тәржемәсе табып, уның аша аңлашырға тейеш. Ә инде сауҙа һәм хеҙмәтләндереү ойошмалары исемдәрендә ебәрелгән хата яҙыуҙар шунда эшләгән кешеләрҙең наҙанлығы һәм мәҙәни кимәле хаҡында бик асыҡ һөйләп тороусы күрһәткес ул. Элек бындай наҙанлыҡ факттарына нәфрәтләнеп йә көлөп кенә ҡараһам, хәҙер уларҙы административ яуаплылыҡҡа тарттырыу мөмкинлеге бар икәнен ишетеп, ҡыуандым. "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды боҙған кешеләрҙән, вазифа биләгән етәкселәрҙән, шулай уҡ юридик шәхестәрҙән байтаҡ күләмдә штраф түләтеләсәк.

***Закирйән ӘМИНЕВ, отставкалағы прокурор, ғилми хеҙмәткәр:*** Һәр халыҡ хәҙер үҙ телен камиллаштырырға, байытырға, уны артабан үҫтереп, һаҡларға тырыша. Был шулай булырға тейеш тә, сөнки халыҡты халыҡ иткән - ул тел һәм рух. Теләһеҙ халыҡ булмай. Белеүемсә, Францияла француз телен яҡлау буйынса бик күп саралар бойомға ашырыла. Уларҙың закондарында француз телен боҙоп яҙған йәки урынһыҙға сит телдәр һүҙҙәрен ҡулланған өсөн ҙур ғына штрафтар ҡаралған. Ошондай уҡ саралар Венгрияла, Төркиәлә ҡулланыла. Республикабыҙҙа ла закондар сығарыу органдарына башҡорт телендәге төрлө рәсми иғландарҙағы, яҙыуҙарҙағы хаталар өсөн, йә булмаһа башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен тарайтырға тырышыуҙар өсөн штраф түләтеү тураһында закон ҡабул итеү мәсьәләһе күптән өлгөрөп еткәйне инде. Был хаҡта мин, хәтерләһәгеҙ, 2008 йылда уҡ "Киске Өфө"лә яҙып сыҡҡайным инде. Бына, ниһайәт, ошо көндәрҙә "Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында Башҡортостан Республикаһы кодексы" ҡабул ителде. Уның II бүлегендә хоҡуҡ боҙоуҙарҙың айырым төрҙәре өсөн административ яуаплылыҡ саралары ҡаралған. Кодекстың 2.3-сө статьяһында тап әлеге Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында БР хоҡуҡи акттары нормативтарын боҙоу осраҡтары менән бәйле административ штраф түләтеүҙәр күләме билдәләнә. Мәҫәлән, статьяның 4-се пунктын ғына ҡарап үтәйек: "Башҡортостан Республикаһында предприятиелар, учреждениелар һәм ойошмаларҙың алтаҡталарын яҙғанда БР халыҡтары телдәрен файҙаланыу тәртибе тураһында Башҡортостан Республикаһы хоҡуҡи акттары нормативтарын боҙған өсөн вазифалы кешеләрҙән 4 меңдән 5 мең һумға тиклем; юридик берәмектәрҙән - 10 меңдән алып 15 мең һумға тиклем административ штраф түләтеү ҡарала". Күренеүенсә, һалынырға тейешле штрафтар күләме ғәйепләләрҙең кеҫәһе өсөн ярайһы ғына һиҙелерлек, ләкин ул мотлаҡ түләтелергә тейеш.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

# ТӘҮБӘГӘ КИЛҺӘМ...

## Хоҙай ғүмеремде лә оҙайтыр, тим

**Алдымда бәләкәй генә рюмка. "Эс тә ҡуй, 100 грамдан ни булыр тиһең, һаулыҡҡа файҙаһы бар тиҙәр бит", тип ҡыҫтай тирә-яҡтағылар. "Эйе, рюмкаһы бәләкәй генә бит, төп күтәрә һуҡ та ҡуй инде", тип ныҡыша эстәге бер "ҡорт".**




Был егет тә айыҡлыҡ яҡлы.

Юҡ, йәмәғәт, был ҡунаҡсыллыҡ түгел, был хөсөтлөк тип нарыҡланырға тейеш. Ошо бәләкәй генә рюмкаға бит күпме емерелгән кеше һәм ғаилә яҙмыштары, ауыл-ҡала, хатта ҙур дәүләттәрҙең дә һәләкәте һыйған. Ә күпме ҡайғы, әсе күҙ йәштәре йыйылған унда. Төпһөҙ бит ул рюмка тигәнегеҙ. Ошоно аңламаһағыҙ, бик тиҙҙән һеҙ ҙә төшөп ятасаҡһығыҙ рюмка төбөнә...

Кем унда юғары трибунаға менгәндәй фәлсәфә һата, тиһегеҙме? Мин дә шул һеҙҙең арала йөрөп ятҡан бер әҙәм балаһымын. Мин дә, ҡасандыр, был шешәнең ауыҙы бик тар, хатта бармаҡ та һыймай, тип йөрөгән кеше инем. Бармаҡ ҡына түгел, хатта кешенең бөтә кәүҙәһе лә анһат ҡына төшөп китә икән шешә төбөнә. Ә инде унан кире сығыуҙары, ай-һай, бик ауыр мәсьәлә. Аҡыл һатыуҙары еңел ул, тиһегеҙме? Эйе, аңлайым, мин дә һеҙҙең шикелле аҙналар буйы күҙҙәрҙе лә аса алмай тәнтерәкләп йөрөгән бәндәмен. Бахмур тигәндәрен, уның нисек итеп тән-йән ғазаптарына тарытыуын, айлы төн хозурында йоҡо әҫәрен күрһәтмәүен үҙ башынан үткәргәндәр генә яҡшы аңлай.

Мин генә түгел, Аллаһы Тәғәлә лә үҙ ҡолдарын иҫкәртә тора: "Аҡылыңа кил, һөйөклө ҡолом, әлегә һуң түгел, тар ләхеттәргә инерһең дә үкенерһең, әммә ләкин яҡты донъяларға кире ҡайта алмаҫһың. Шайтан ғәли йәнәптәре гел һинең тирәлә урала. Төштәреңә инеп хурлай, мыҫҡыллай, йөрәгеңә шомдар һалып тыныслығыңды боҙа", ти.

Әле мин үҙем дә сығып бөтмәгәнмен был "йәшел йылан" ҡоллоғонан, әммә ләкин нөктә ҡуям был алама ғәҙәткә, тигән ниәтем бар. Бәлки, Аллаһы Тәғәлә тәүбәгә килеүемде күрһә, ялғап ебәрер өҙөлә яҙған ғүмеремде, киләһе матур яҙмышыма ла яҙып ҡуйыр ризыҡ-бәрәкәтемде. Уйланырға урын бар бит, егеттәр һәм ҡыҙҙар, эскелек тигән яуыз нәмәкәй бер ҙә биҙәмәй ул ҡурҡыу белмәҫ көслө башҡорт рухын.

**Салауат КЕЙЕКБАЕВ.**
**Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылы.**

*✓ Ә гәзиттең иң тоғро дуҫтары беҙҙең менән ҡалғандыр, тип өмөтләнәбеҙ. Сөнки тоғроларға йортонда - почта йәшниге, ауылында почтальон булмауы ла, аҡса юҡлығы ла - бер ни ҙә ҡамасауламай.*



*ЙӘҮКӘ ПРЕСС*




# ПОЛИЦАЙҘАР ҮПКӘЛӘМӘҺЕН, ТИП...

**Рәсәй.** Милицияның атамаһын үҙгәртеү ҡайһы бер ҡатмарлыҡтар ҙа тыуҙырҙы әле ул. Бына, мәҫәлән, муниципалитеттар етәкселәре гәзитебеҙҙең "Йәүкә пресс" рубрикаһына шылтыратып, кәңәш һорай башланы. Баҡтиһәң, элек һәр ҡала һәм районда мәктәптәр тирәһендәге юлдарҙа машиналарға тиҙлекте кәметеү өсөн "лежачий полицейский"ҙар эшләп сыҡҡандар икән. Хоҡуҡ һаҡлау органының исемен алыштырғас, хәҙер уларҙы "лежачий полицейский" тип атау хөрмәтле үә ғиззәтле полициябыҙҙың абруйын төшөрөү була, имеш. Был проблеманы хәл итеү маҡсатынан "Киске Өфө" полицияны, горизонталь ятҡан халәттә икенсе төрлө атау буйынса конкурс иғлан итә. Мәҫәлән, Францияла "лежачий полицейский"ҙарҙы "лежачий фараон" тип атайҙар икән. Бәлки, беҙ икенсе атама уйлап табырбыҙ. Уйлап табырға тиһәң ,беҙҙе ҡуш бит инде!

**Башҡортостан.** Аҫаба башҡорттар, тарих һабағын иҫкә төшөрөп, Медведев батшаға барыу өсөн супер-пупер юристарҙан һәм адвокаттарҙан торған инициатив төркөм туплай, имеш. Заманында атай-олатайҙары Иван Грозныйға барып, аҫаба ерҙәренә хужа булыу хоҡуғын биргән грамота алып ҡайтҡанын һис онота алмайынса, был экспедицияны яңынан ҡабатламаҡсы улар. Сөнки, башҡорт ерҙәрен башҡорттарға биргән был ҡанунды әлегәсә берәү ҙә юҡҡа сығармаған, хатта бөйөк юлбашсы В. И. Ленин да, ҡыҙып китеп, "Ер - крәҫтиәндәргә!" тип декрет ҡабул итеп ҡуйған. Яңы заман килгәс, халыҡ вәкилдәре, йәғни депутаттар, үткәндәргә төкөрөп тә бирмәй, яңы закондар ижад итә башланы. Уларға ярашлы, хәҙер ерҙе йә өлөшөнә төшкән пай итеп, йә 49 йылға ҡуртымға алырға мөмкин. Быларҙы ишетеп, В.И.Ленин бабабыҙ, бәлки, мавзолейында ҡыуанып яталыр ҙа, Иван Грозный ҡәберендә борғоланмаймы икән? Унынһын инде инициатив төркөмдөң сәфәренән һуң хәбәр итербеҙ.

**Шамонино.** "Үҙ йортом" дәүләт программаһы буйынса умарталар кеүек теҙелешеп ултырған ағас йорттарҙан яңы ауыл хасил иткән Шамонино халҡы бөгөн ер менән күк араһында аҫылынып тора. Баҡтиһәң, яңы ауылды бер район да үҙ балансына алырға теләмәй икән. Рәсәй телеканалындағы "Аншлаг" тапшырыуында сығыш яһаған Елена Воробей кеүек, "Возьмите нас!" тип инәлеп ялҡҡас, шамонлылар хәҙер үҙ аллы автономиялы-суверенлы Шамонино районын ойошторорға булған...

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА әҙерләне.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Наҙанлыҡтан... штраф түләп кенә котолоп булырмы икән?*

**(Башы 1-се биттә).**

Шунһыҙ ундай сараны ҡулланып тороу ҙа кәрәкмәҫ ине. Кодекс статьялары мотлаҡ тормошҡа ашырылһа, файҙаһы булыр, моғайын. Шулай булмаһа, беҙ төрлө тәҡдимдәр, декларациялар менән генә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә ашыра алмаясаҡбыҙ. Был законды һанға һуғырға теләмәгән кешеләр өсөн бик һөҙөмтәле тәрбиәүи сара булмаҡсы, әгәр ҙә урындағы власть органдары, прокуратура хеҙмәткәрҙәре закондың теүәл үтәлешен күҙәтеп барһа инде. Закон боҙолоу фактары хаҡында уларға йәмәғәтселек, айырым кешеләр яҙма рәүештә хәбәр итеп тә торһон ине.

***Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары:***

Хәҙерге осорҙа башҡорт телен республикабыҙҙың дәүләт теле булараҡ үҫтереү, уның ҡулланыу даирәһен киңәйтеү өсөн ныҡлы юридик нигеҙ бар. 1999 йылда "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы республика законын ҡабул итеү башҡорт теленең артабанғы үҫеше өсөн хәл иткес роль уйнаны. Ошо законды ғәмәлгә ашырыу буйынса Дәүләт программаһы ҡабул итеү, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы республика комиссияһының башҡорт телен һәм башҡа халыҡтарҙың тел өлкәһенә ҡараған ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында алып барған эшмәкәрлеге бик әһәмиәтле. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ошоға тиклем әлеге законды боҙоуҙарға юл асыҡ булды: кем нисек теләй, шулай эшләне - Өфө урамдары тулы хаталы алтаҡталар; туҡталыштар, урам исемдәрендәге хилафлыҡтар һанап та, сүпләп тә бөтөрөрлөк түгел. Бындай күренештәр менән Өфө ҡалаһы һәм уның район хакимиәттәре үҙҙәренсә көрәшеп тә ҡараны, файҙаһы ғына аҙ булды.

Күптән түгел БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында ҡабул ителгән "Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында Башҡортостан Республикаһы кодексы" хәҙер бындай төр хоҡуҡ боҙоуҙарға сик ҡуйыр тип өмөтләнгә килә. Һәр хәлдә, күп нәмә үҙебеҙҙең, йәмәғәтселектең әүҙемлегенә бәйле, сөнки ниндәйҙер осраҡтарҙа кем тарафынандыр һәр бер закон боҙоу факты хаҡында тейешле органдарға хәбәр ителергә, проблемаға битараф булмаҫҡа кәрәк. Мәҫәлән, кемдер хакимиәткә үҙенең әсә телендә хат яҙһа, уға шул уҡ телдә яуап хаты ебәрелергә тейеш. Әгәр берәй мәктәптә етерлек кимәлдә балалар һаны бар икән, улар туған телендә белем алырға хоҡуҡлы. Ә ысынбарлыҡта иһә, был үтәлмәй. Тимәк, ниндәйҙер һылтауҙар табып, балаларҙы үҙ телендә уҡытыуға ҡаршы килгән урындағы мәғариф идаралығы етәкселеге административ яуаплылыҡҡа тарттырылыуы ихтимал.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

*КЕМ АЛЫҠ!*

# ЯҘЫЛЫУ ДАУАМ ИТӘ

**Редакция тормошондағы иң мәшәҡәтле, иң яуаплы, иң тынғыһыҙ осорға - гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының сираттағы этабына йомғаҡ яһап ултырыуыбыҙ. Күңел төңөлөүе кисереү бар бер аҙ: уҡыусыларыбыҙ тап бер меңгә кәмегән. Әммә ул уҡыусыларыбыҙ ошо арала беҙгә кире ҡайтыр тип өмөтләнәбеҙ, сөнки гәзиткә яҙылыу бер ваҡытта ла туҡтамай. 17 июлгә тиклем почтаға инеп сығып, киләһе ярты йыллыҡ өсөн гәзитебеҙгә яҙылып ҡуйһағыҙ, уны августан алдыра башларһығыҙ.**

Ә гәзиттең иң тоғро дуҫтары беҙҙең менән ҡалғандыр, тип өмөтләнәбеҙ. Сөнки тоғроларға йортонда - почта йәшниге, ауылында почтальон булмауы ла, аҡса юҡлығы ла - бер ни ҙә ҡамасауламай. "Их, барыһы ла һеҙҙең кеүек булһын ине!" тип ҡуяһың ошондай ваҡытта.

**Кем алыҡ?** Хәтерегеҙҙәлер, беҙ май һәм июнь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә 15 дана башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим" китабы вәғәҙә иткәйнек. Ул китапты алырға теәүселәрҙең бик күп булыуына ҡарағанда, халҡыбыҙ дин менән ҡыҙыҡһына, иманға тартыла, иншалла. Бына улар, был изге китапҡа эйә булыусылар: Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан **Т. Ишкилдин**, Ауырғазы районы Үрге Ләкәнде ауылынан **Рәсимә Йәғәфәрова**, Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан **Мөхәмәт Әбдисов**, Ишмөхәмәт ауылынан **Хәлит Теүәлбаев**, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан **Ғәлиә Ғәлиәхмәтова**, Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан **Хәлиҙә Шәймәрҙәнова**, Дәүләкән районы Сапай ауылынан **Фәнүр Лотфрахманов**, Мәләүез ҡалаһынан **Ф. Йәрмөхәмәтова**, Әбйәлил районы Байым ауылынан **Нәфисә Мәғәсумова**, Октябрьский ҡалаһынан **Ә. Хасаев**, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан **Самат Аратов**, Ҡырмыҫҡалы районы Ҡырмыҫҡалы ауылынан **Ғәлинур Ишемғолов**, Хәйбулла районы Оло Әбеш ауылынан **Роза Рәхимғолова**, Туймазы районы Ҡарамалы-Ғөбәй ауылынан **З. Хисаметдинова**, Учалы районы Ташҡыя ауылынан **Даминдар Сәлихов**.

**"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһында ҡатнашып, яҡындарына, туғандарына, яҡташтарына бер нисә дана "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырған дуҫтарыбыҙға оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Бына улар: эшҡыуар Фәниә Йәнбирҙина, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы директоры Рәйлә Фәсхетдинова, "Салют" санаторий-һауыҡтырыу лагеры етәксеһе Нәилә Усманова, "СТРОЙТРЕЙДИНГ" компанияһы директоры Иршат Аҫылғужин, "БАШБЛАНКИЗДАТ" йәмғиәте директоры Гөлсәсәк Ҡадирова, "Банкос" директоры Рәүеф Әлмөхәмәтов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы ярҙамсыһы Миҙхәт Мәмбәтов, "АС-Проект" проект институты директоры Гүзәл Яубаҫарова һәм башҡалар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, "Киске Өфө"һөҙ ҡалғандарға әйтегеҙ: гәзитебеҙгә яҙылыу өсөн бер ҡасан да һуң түгел. Шулай уҡ 1 июлдән 31 августа тиклем 2012 йылдың беренсе ярты йыллығы өсөн быйылғы хаҡтар менән ваҡытынан алда матбуғат баҫмаларына яҙылыу башлана, тигән иғланыбыҙҙы ла иҫкә алып ҡуйығыҙ. Июлдә гәзитебеҙгә яҙылып, шулай уҡ 2012 йыл өсөн дә яҙылып ҡуйып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә 5 "Ҡөрьән-Кәрим" оттороу мөмкинлеге бар. Кем алыҡ?**




**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов " Общественная электронная газета" сайтында онлайн-конференция үткәрҙе. 18 сәғәттән 19 сәғәт 30 минутҡа тиклем дауам иткән аралашыу мәлендә 300-ҙән ашыу һорау килде. Президент халыҡ менән урындағы үҙидара органдары араһындағы бәйләнештәргә, республикала социаль туризмды үҫтереүгә, эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү, балалар баҡсалары төҙөү, бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыу, юлдар ремонтлау кеүек мәсьәләләргә арналған һорауҙарға яуап бирҙе.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда "Башҡортостан Республикаһында территориаль йәмәғәт үҙидараһын үҫтереү тураһында" тигән темаға түңәрәк ҡор ойошторолдо. Башҡортостанда хәҙер үҙҙәренең уставы булған 500-ҙән ашыу территориаль йәмәғәт үҙидараһы төҙөлгән. Парламент рәйесе К. Толкачев аңлатыуынса, территориаль йәмәғәт үҙидараһының үҙенә генә хас эш үҙенсәлектәре бар. Бындай ойошмалар араһында, мәҫәлән, Ишембай ҡалаһының "Смаҡай", Сибай ҡалаһының "Төйәләҫ" һәм Белорет ҡалаһындағы ойошмалар юридик көскә эйә. Әбйәлил һәм Ишембай райондарында һаҡланған аҡһаҡалдар советы һәм ағинәйҙәр клубы кеүек халыҡ институттарының абруйы ифрат ҙур.

✓БР Хөкүмәте ҡарары менән Рәсәйҙең 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүенә 200 йыл тулыуҙы билдәләүгә әҙерлек буйынса республика комитеты составы раҫланды. Уны Республика Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов етәкләй. Юбилейға әҙерлек буйынса дәүләт комиссияһы 2007 йылдан эшләй. Ул йылдарҙағы һуғыш хәрәкәте илдең биш төбәгендә бара, хәҙерге Рәсәйҙең 34 субъекты халҡы яуҙарҙа ҡатнаша, аҙыҡтүлек һәм башҡа кәрәк-яраҡтар менән ярҙам итә. Башҡортостан иһә Ватан һуғышына 29 полк ебәрә.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов IKEA-ның Рәсәйҙәге идарасы директоры Пер Вендшлаг менән осрашты. Осрашыу барышында бөтә донъяға билдәле сауҙа селтәре вәкиленә Өфөлә IKEA мегаполисын сафҡа индереү тураһында ҡул ҡуйылған акт тапшырылды. Яңы сауҙа селтәрен 25 августа асыу планлаштырыла. Әле унда өҫтәмә вакансия урындарға хеҙмәткәрҙәр йыялар. Көн дә 11-ҙән 20 сәғәткә тиклем ИКЕА администрацияһына мөрәжәғәт итергә мөмкин.

✔ *Шундайын ҡеүәтле держава халҡы бер ил башлығының броневик башына менеп тотҡан телмәренән һуң иле менән хушлашырға ризалашты ла ҡуйҙы. Был, һис шикһеҙ, беҙгә ҡаршы державаның йәшерен яу һөҙөмтәһе.*



*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

**Әйтемдең исеменән үк күренеүенсә, һүҙ бында йәшерен яуҙан һаҡланыу зарурлығы хаҡында бара. Нимә һуң ул йәшерен яу? Шул турала фекер йөрөтәйек.**

# ЙӘШЕРЕН ЯУҘЫ...

## юҡҡа һанама



Кешелек яралғандан алып донъяла бер туктауһыҙ һуғыш, йән ҡыйыш бара. Дөрөҫтөрмө-юҡмы, кешелек тарихында ни бары 250 самаһы ғына көн һуғыш булмай, донъя тынып торған, тиҙәр. Ҡалған көндәрҙәге барлыҡ һуғыштарҙа 6 миллиардтан ашыу кеше ҡорбан булған. Иң ҙур һуғыштарҙы алғанда, уларҙың һаны 15 мең самаһы, уртаса алғанда бер йылға 12 һуғыш тура килә икән. Мин бына ошо юлдарҙы яҙып ултырам, ә Ер шарының ҡайһылыр ерендә һуғыш ошо минутта, ошо секундта бара. Ошо минутта, ошо секундта тап шул һуғыш арҡаһында кемдәндер ғүмере өҙөлә...

Һуғыштарҙың да төрлөләре була. Башҡаларҙың ерен, иркен, мөлкәтен баҫып ала торғандары, ватаныңды, илеңде, ереңде, иркеңде яҡлай торғандары, кемдәндер сәйәси амбицияһын "туйындыра" торғандары, әммә һуғыштар ике яҡ өсөн дә нисек кенә аталмаһын, асылда, уның йөкмәткеһе бер үк - кеше йәнен ҡыйыу. Кеше йәнен ҡыйыуҙы бер ниндәй сәйәсәт тә аҡлай алмайҙыр ул. Ҡыҫҡаһы, ике яҡтағы сәйәсмәндәрҙең дипломатияһы бөткән урында һуғыш, йән ҡыйыш башлана. "Һуғышты сәйәсмәндәр башлай, ә һалдаттар дауам итә", тиҙәр бындай осраҡта.

Кем уйлаған, XX быуат беҙгә тағы ла ҡеүәтлерәк һуғыш ҡоралы менән килер ҙә, яңы XXI быуат беҙгә тап шул сүрәттә үҙ йөҙөн асыр, тип? Донъяла артиллерияларҙан да, газ, химия, атом, нейтрон бомбаларҙан да ҡеүәтлерәк, дәһшәтлерәк емертекс көскә эйә һүҙ, мәғлүмәт ҡоралы бар. Йәшерен яуҙың да иң төп ҡоралы ул - һүҙ һәм мәғлүмәт. Донъяла был ҡоралға еткән ҡорал юҡ. II Бөтә донъя һуғышында фашистик Германия Советтар Союзын юҡ итер өсөн миллиондарса ҡорбан килтереп, нисәмә армия, нисәмә дивизия, нисәмә хәрби техникаһын сарыф итте, әммә Бөйөк Ватан һуғышына күтәрелгән илде еңә алманы ул. Шул уҡ ваҡытта 1941 йылдан алып 1991 йылға тиклем Советтар Союзына ҡаршы йәшерен яу алып барған Америка Ҡушма Штаттары беҙҙең СССР империяһын юҡҡа сығарҙы. Артиллериянан түгел, хатта пистолеттан бер генә атыуһыҙ ҙа ирешә быға АҠШтың махсус службалары. Әлбиттә, Советтар Союзының юҡҡа сығыуында социалистик системаны, уның планлы иҡтисадын да сәбәп итергә булалыр, әммә бар донъя сәйәсмәндәре илебеҙҙең тарҡалыуын иң беренсе нәүбәттә беҙгә ҡаршы торған донъя державаһының йәшерен эшмәкәрлек һөҙөмтәһе тип баһалай. Йәшерен яуҙы юҡҡа һананыҡмы-юҡмы, һәр хәлдә, шундайын ҡеүәтле держава халҡы бер ил башлығының броневик башына менеп тотҡан телмәренән һуң иле менән хушлашырға ризалашты ла ҡуйҙы. Был, һис шикһеҙ, беҙгә ҡаршы державаның йәшерен яу һөҙөмтәһе. Беҙ уны һанға һуҡманыҡ, шуға еңелдек тә.

Ҡайһы бер асыҡланып бөтмәгән факттар буйынса, Кинйә Арыҫланов ты 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышында йәшерен яуҙың мәғлүмәт ҡоралы серен тәрән аңлаған стратегы булған тиҙәр. Ул баш күтәреүселәргә ҡаршы көрәшкән ҡайһы бер генералдарҙың батшалыҡҡа ҡаршы эшләгән электәрен белгән һәм был мәғлүмәтте батшабикәгә еткереү менән янап, уларҙы ҡурҡытып тотҡан, имеш. Әлеге ваҡытта был фараздарҙы тикшереү, тарихи документтар һәм факттар менән нығытыу менән билдәле журналист, Кинйә Арыҫлановтың вариҫы Салауат Юлбарыҫов шөғөлләнә. Бында уйланырлыҡ урын бар, сөнки Салауат менән Пугачевҡа яҡын торған эре яу башлыҡтарынан, асылда, Кинйә Арыҫланов ҡына тотолмай һәм уның ғүмеренең аҙағын ҡайҙа тамамлағаны әлегә билдәһеҙ булып ҡала.

Беҙгә һәм күп милләтле Рәсәй халҡына ҡаршы асылған йәшерен яу әле булһын бара, әле булһын дауам итә. Һылтауын да таптылар - глобалләшеү тип атала ул. Дөрөҫөн әйткәндә, глобалләшеү, йәғни дөйөмләшеү һылтауы менән донъя капиталы яйлап-яйлап Рәсәйҙе үҙ ҡеҫәһенә төшөрә бара. Рәсәй халҡы көн һайын әрсәһендә йәнгә барған үлтереүҙәргә лә, көсләүҙәргә лә, көпә-көндөҙ талауҙарға ла, башҡа төрлө емертекс ғибрәтле хәл-күренештәргә лә тамам өйрәнеп бара. Көнбайыш индивидуализмы хәҙер инде беҙҙең аң аша ҡанға һеңеп бара. Элекке Советтар Союзының, хәҙерге Рәсәйҙең иң аҡыллы, иң алдынғы ҡарашлы интеллектуалдары, үҙ илебеҙҙә яҡлау тапмайынса, көн хаҡына, тамаҡ хаҡына сит илгә сыға, үҙ иле менән мәңгелеккә хушлашып, йәшерен яу үткәреүселәрҙең аяғына барып йығыла.

Йәшерен яуҙы юҡҡа һанама. Намыҫлы кешенең өҫтөнә өйөлгән ялған яла, түгелгән бысраҡ һыу, ауыл буйлап ебәрелгән ғәйбәт һүҙ кеүек ул йәшерен яу. Уның емерткес көсө берҙәй үк дәүләткә лә, милләткә лә, айырым шәхескә лә зарарлы. Хәҙерге һәр төрлө телерадиоканалдар, башҡа төрлө матбуғат саралары, Интернет селтәре аша беҙгә ҡарата асылған йәшерен яу дәүләтселектең генә түгел, милләт, шәхес, енес кәртәләрен емереп, ғөмүмән, кешелекте юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән. Беҙ ул йәшерен яуға асыҡ торҡа менән яуға сығып ҡына ҡотола алаҫаҡбыҙ. Ундай кимәлдәге яу ысулдары ваҡлыҡтарына төшөп түгел, һәр хәлдә. Һүҙемде күренекле шағирә, "Аҡбуҙат" журналының баш мөхәррире Тамара Искәндәриәнең "Жанна Д'Арк монологы" тигән шиғыры менән тамамлайым.

Асыҡ торҡа менән яуға сығам!<br>
Был ҡылығым - дошман алдында<br>
Танау сөйөп кәпәренеү түгел,<br>
Ә янымда барған һатлыҡ йәнгә<br>
Һуңғы нәфрәт һүҙем, асылда.

Асыҡ торҡа менән яуға сығам.<br>
Был ҡылығым - халҡым алдында<br>
Үҙ башымды данлау өсөн түгел,<br>
Ә хаталар баҫҡан был замандан<br>
Ғәҙел хөкөм һорау, асылда.

Асыҡ торҡа менән яуға сығам...<br>
Тарих күрһен ысын хаҡлыҡты:<br>
Кем битлеген һаҡлап артҡа сигә,<br>
Кем торҡаһыҙ көйө<br>
Һуңғы яуҙа<br>
Һаҡлап ҡала данын халыҡтың.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

## ТӘЖРИБӘ МӘКТӘБЕ ЛӘ...

"Киске Өфө"нө сыға башлаған ваҡытынан бирле алдырып уҡыйым. Үҙем дә матбуғат өлкәһендә, гәзиттә эшләгән кеше булараҡ, уға ниндәйҙер кимәлдә тәжрибә мәктәбе итеп тә ҡарайым, сөнки өйрәнерлек нәмәләр күп.

Ауылдарҙа гәзит уҡыусылар менән осрашыуҙарҙа булырға, республика һәм район матбуғат баҫмалары хаҡында төрлө фекерҙәр ишетергә тура килә. Тик мин бер ҡасан да кемдәндер "Киске Өфө"нө ямanlағанын ишеткәнем юҡ. Уҡыусыларыбыҙ гәзитте юғары зауыҡ, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләүсе баҫма булараҡ баһалай һәм ярата. Гәзиттең үҙенә генә хас йөҙө, идея-тематик бөтөнлөгө бар. Халыҡ араһында матур башланғыстары менән популяр был гәзит. Әле бына эскелеккә ҡаршы хәрәкәттә әүҙем ҡатнашыуы хуплауға лайыҡ. Эскеһеҙ туйҙар сценарийҙары конкурсы бик ҡыҙыҡлы, файҙалы булмаҡсы.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА,**<br>
**Белорет районы.**

## ...МИЛЛӘТ ТРИБУНАҺЫ ЛА УЛ

"Киске Өфө" гәзитен сыға башлағандан алдырып уҡып барам. Баҫма минең күңел ихтыяжыма, йәшәү рәүешемә әйләнде. "Киске Өфө" ысын мәғәнәһендә халыҡ гәзите. Ҡайһы бер кешеләр: "Өфө гәзите бит ул, унда беҙҙең район, беҙҙең ауыл тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт баҫылмай бит",- тип башынан себен осорорға тырыша. Был фекерҙе гәзитте уҡып та ҡарамаған кешеләр әйтә. Сөнки уны бер тапҡыр ҡулына алып уҡыған кеше, гәр ҙә тыуған милләтебеҙ өсөн борсолоп йәшәһә, бер ҡасан да унан айырыла алмаясаҡ. Эйе, гәзиттә ҡайһы бер районлар, ҡайһы бер ауылдар хаҡында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт баҫылмауы бар, әммә уның биттәрендә тотош милләтебеҙгә, республикабыҙға, илебеҙгә ҡағылған проблемалар күтәрелә һәм улар барыбыҙға ла ҡағыла. "Киске Өфө"нөң халыҡ гәзитенә, милләт трибунаһына әүерелеүе тап ошо сифатына бәйле.

**Иҙрис НОҒОМАНОВ.**<br>
**Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ 1 июлдән Рәсәйҙә яңы өлгөләге паспорт тапшыра башлаясаҡтар. Камиллаштырылған документтың төп айырмаһы - өсөнсө битендә машина уҡый алырлыҡ ҡына яҙыуы булыуы. Штрих-кодҡа шәхеснамәлә яҙылған барлыҡ мәғлүмәттәр индерелгән. Халыҡ-ара стандарттарға яраҡлаштырылған паспортты күсереп эшләп булмай. Самолет йә поезға ябай паспорт менән билет алғанда операторҙар хата ебәрергә мөмкин, ә бындай паспорт менән хатаға юл ҡуйылмай. Элекке паспорттар үҙҙәренең ваҡыты сыҡҡансы ғәмәлдә ҡала. Граждандар яңы документты 14, 20, 45 йәше тулғас йә фамилияһын үҙгәрткәндә алмаштыра ала.

✔ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең "Билдәле башҡорт ғалим-тюркологы, яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған сараларға әҙерлек һәм уларҙы үткәреү тураһында"ғы ҡарарына ҡул ҡуйылды. Юбилей саралары сиктәрендә халыҡ-ара конференция үткәреү планлаштырыла.Шулай уҡ профессорҙың ғилми хеҙмәттәре йыйынтыҡтары донъя күрәсәк, "Урман китабы" йыйынтығы баҫыласаҡ. Туймазы районында булып үткән "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәрҙең республика конкурсы ла күренекле ғалимдың тормошона һәм ижадына арналды.

✔ "Рәсәй таянысы" дөйөм Рәсәй йәмәғәт ойошмаһы илдең 40 төбәге араһында бәләкәй һәм урта бизнесты үҫтереү өсөн шарттар буйынса рейтинг үткәрҙе. Өфө Рәсәйҙең эре ҡалалары араһында бишенсе урынды, ә Башҡортостан эшҡыуарлыҡты алып барыу өсөн шарттар индексы буйынса унынсы урынды биләй.

✔ Ноябрь айында Башҡортостанда Бөтә Рәсәй әсәләр форумы үтәсәк. "Бындай идея Ульяновскиҙа үткән форумда булғанда барлыҡҡа килде, - тине "Мәрхәмәт" мәрхәмәтлек фондының попечителлек советы рәйесе Гөлшат Хәмитова. - Башҡортостан күп балалы әсәләр иҫәбе буйынса дүртенсе урында тора. Шулай булғас, ҡаҙаныштарыбыҙҙы Волга буйы округы ғына түгел, бөтә Рәсәй күрһен".

✔ Мәжит Ғафури исемендәге парк биләмәһендә Өфө ҡала эске эштәр идаралығы ҡарамағындағы атлы полиция полкы өсөн махсус бина тантаналы асылды. Был бина баш ҡала хакимиәте аҡсаһына төҙөлдө. Бында административ бинанан тыш аттар өсөн 20 вольер, күнекмәләр өсөн майҙансыҡ та урынлашҡан. Атлы полк баш ҡаланың урман-парк зонаһында, Сипайлово биҫтәһендә йәмәғәт тәртибен һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән.

✓ *Илдең иң бысраҡ ҡалалары исемлегендә Башҡортостандың дүрт ҡалаһы бар: Өфө, Нефтекама, Стәрлетамаҡ, Салауат. Былтыр Өфө ҡалаһы атмосфераһына 134 мең тонна сәнәғәт ҡалдыҡтары ташланған.*



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# БЕҘ - БАЛАЛАРҒА...

## балалар беҙгә ҡанат ҡуя



**Киләсәктә милли кадрҙар булып, халыҡҡа хеҙмәт итәсәк башҡорт балалары белем алған мәктәптәрҙең хәле менән һәр ваҡыт ҡыҙыҡһынып торорға тырышабыҙ. Сөнки милләтебеҙҙең лайыҡлы улдары һәм ҡыҙҙары буласаҡ кешеләр тап ошо белем усаҡтарында тәрбиәләнә, күңеленә гәм, сәм орлоҡтары һалына. Үткән аҙнала сығарылыш уҡыусылары өсөн тағы бер мөһим ваҡиға булды: улар ҡулдарына өлгөргәнлек аттестаты алды. Уҡыу йортон ниндәй һөҙөмтәләр менән тамамлаған улар, ҡайҙа уҡырға барасаҡтар? Беренсе синыфҡа нисә бала уҡырға киләсәк? Был һорауҙарға яуап эҙләп, башҡорт гимназиялары һәм лицейҙары етәкселәре, уҡытыусыларына мөрәжәғәт иттек.**

**Рима ҒӘБИТОВА, Башҡорт республика лицей-интернатының уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары:** Лицей быйыл бөтәһе 62 уҡыусыны оло тормош юлына сығарҙы, уларҙың 4-һе уҡыу йортон - алтын, 4-һе көмөш миҙалға тамамланы. БДИ һөҙөмтәләре лә былтырғыға ҡарағанда күпкә юғарыраҡ булды. Был үҙе үк уҡыусыларыбыҙҙың белем кимәле тураһында һөйләй. Уҡыусыларыбыҙ башлыса техник вуздарҙы һайларға йыйына, бигерәк тә Мәскәү, Санкт-Петербургта урынлашҡан юғары уҡыу йорттары менән ҡыҙыҡһына. Башҡортостанда ҡалғандары Өфө дәүләт авиация техник университетын, Өфө дәүләт нефть техник университетын, башҡа вуздарҙың математика, физика факультеттарын һайлай. Тик егеттәр генә тәрбиәләнгән уҡыу йортонда белем биреүгә лә, тәрбиә эшенә лә бик етди ҡарайбыҙ, шуға ла улар ҡайҙа ғына йөрөһәләр ҙә, юғалып ҡалмаҫтарына ышанам.

Лицей-интернатта физика-математика йүнәлешендә белем бирелә, етмәһә, уҡыусылар инглиз телендә иркен аралашырға өйрәнә. Шуға ла беҙгә уҡырға килергә теләүселәргә, уҡыу йылы барышында үткәрелгән "Матлет" кеүек олимпиадалар, быйыл беренсе тапҡыр уҙғарылған "Орбита" полиолимпиадаларында ҡатнашығыҙ, әүҙем булығыҙ, үҙегеҙҙе күрһәтергә ҡурҡмағыҙ һәм уңыш һеҙҙең барығыҙға ла йылмаясаҡ, тип әйтке килә.

**Мәнәүәрә МӘҠСҮТОВА, Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт ҡала гимназияһының тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары:** Гимназиябыҙҙы 44 бала тамамланы, икәүһе - көмөш, икәүһе алтын миҙал алып сыҡты. Йыл һайын сығарылыш уҡыусыларыбыҙ ҡыуандырып тора. Былтырғы уҡыусыларыбыҙҙың алтауһы Мәскәү һәм Санкт-Петербургтың юғары уҡыу йорттарында белем ала, быйыл да Рәсәйҙең абруйлы вуздарын һайлаусылар булыр, моғайын. Уҡыусыларҙы республиканың техник вуздары, төрлө университеттарҙың математика, физика факультеттары ла ҡыҙыҡһындыра, Башҡорт дәүләт аграр университетында, Өфө дәүләт сервис институтында уҡырға теләк белдереүселәр ҙә бар. Һуңғы осорҙа гимназия уҡыусылары араһында табип һөнәренең абруйы ла арта, химия, биология йүнәлеше буйынса юғары белем алыусылар күбәйә. Беренсе синыфҡа уҡыусыларҙы ла беҙ алдан йыя башлайбыҙ, улар көҙҙән әҙерлек курстарына йөрөй. Быйыл гимназияға уҡырға килергә теләүселәр күп, әлегә беренселәрҙең һаны ике синыф асырлыҡ булды.

**Илшат БИҠҠОЛОВ, Өфө ҡалаһының 140-сы башҡорт гимназияһы директоры:** Өфөнөң Инорс биҫтәһендә Рәсәйҙә иң эре моторҙар төҙөүсе предприятие урынлашҡан, шуға ла беҙҙең гимназияла башлыса эшсе башҡорт ғаиләләренең балалары белем ала. Быйылғы уҡыу йылын 25 бала тамамланы, уларҙың икәүһе көмөш миҙалға лайыҡ булды. Ата-әсәләренең һөнәри юлын һайлап, Өфө авиация-техник университетында белем алырға теләүселәр беҙҙә күпселекте тәшкил итә. Унан һуң Өфө дәүләт нефть техник университеты, Башҡорт дәүләт университеты килә. Былтыр гимназияны тамамлаған 15 уҡыусының 13-ө юғары уҡыу йортона уҡырға инә алды, шуға быйыл да һынатмаҫтар тип уйлайым. Сығарылыш уҡыусылары менән хушлаштыҡ, хәҙер инде беренсе синыфҡа уҡыусылар йыйыу эше башланды. Әле миндә 65 ғариза ята, тимәк, быйыл 3 синыф асырға мөмкинлегебеҙ буласаҡ. Шуныһы шатландыра, йылдан-йыл беренсе синыфҡа килеүсе балалар һаны арта бара. Гимназияла 20-нән артыҡ секция, хәрби-патриотик клуб эшләй медицина стационары ла бар, экспериментал майҙансыҡ, вуз синыфтары астыҡ, 2004 йылдан ЮНЕСКОның ассоциациялы мәктәбе һаналабыҙ - ҡыҫҡаһы, балаларҙы һәм уларҙың ата-әсәләрен йәлеп итерлек һынғай яҡтарыбыҙ күп.

**Зәлифә СИТДИҠОВА, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се башҡорт лицей-интернаты директоры:** Балаларын беҙгә бик теләп алып килә ата-әсәләр. Уҡытыу һәм тәрбиә өлкәһендә тупланған тәжрибә етерлек, уңыштарыбыҙ ҙа бихисап. Әйтәйек, быйыл сығарылыш синыфын 32 бала тамамлаһа, шуларҙың 5-е - көмөш, береһе алтын миҙалға бөтөрҙө мәктәпте. Былтырғы йыл күрһәткестәре буйынса сығарылыш уҡыусыларбыҙҙың 84 проценты юғары, ҡалғандары барыһы ла урта махсус уҡыу йорттарына уҡырға инде. Йыл һайын 6-сы синыфтарға уҡыусылар ҡабул итәбеҙ. Быйыл 7-се һәм 10-сыларға ла берәр синыф өҫтәмәксебеҙ. Сит өлкәләрҙән килгән башҡорт балалары ла уҡый беҙҙә. Лицейҙа ойошторолған журналистика, бейеү, драма һәм башҡа түңәрәктәрҙә әүҙем шөғөлләнеү арҡаһында улар төрлө һөнәрҙәргә маһир булып үҫә.

**Әхәт ВАҺАПОВ, Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:** Быйыл 11-се синыфты бөтәһе 63 уҡыусы тамамланы. Шуларҙың бишеһе Рәсәйҙең төрлө региондарынан - Ырымбурҙан, Ханты - Манси автономиялы округынан һәм Камчатканан. Миҙалсыларға килгәндә, быйыл 3 уҡыусы - алтын, 4-әү көмөш миҙалға тамамланы. Былтыр гимназияны бөтөргән 59 уҡыусының 57-һе төрлө вуздарға уҡырға инде. Күптәр Мәскәү, Санкт-Петербург, Сочи, Һамар ҡалаларындағы юғары уҡыу йорттарында белем ала. Ҡайһы бер йылдарҙа вуздарға инеүселәр 100 процентты ла тәшкил итә. Беҙҙең төп маҡсатыбыҙ милли кадрҙар үҫтереү булғас, 100 проценты менән юғары уҡыу йортона инһендәр тип тырышабыҙ. Шулай ҙа БДИ системаһын индереү һөҙөмтәһендә бөгөнгә көндә юғары уҡыу йорттары менән хеҙмәттәшлек итеү һүлпәнәйә төштө. Быйылдан гимназияла "ЮНЕСКО" клубы эшләп килә. Халыҡ-ара ойошма клубы булараҡ, халыҡтарҙың йолалары һәм традицияларын өйрәнеү, тергеҙеү, уларҙы үҫтереү маҡсатында күп эш башҡара ул. "Батыр" спорт клубында 20-нән артыҡ спорт һәм мәҙәни йүнәлешле төрлө түңәрәктәр эшләй. "Урал батыр" эпосын һөйләүселәрҙең төбәк-ара конкурсында ҡатнашып, 2010 йылдың йәйендә уҡыусыбыҙ Хисмәтуллина Рәсилә Гран-при яуланы, быйыл ул Рәсәй Президенты грантына лайыҡ булды.

Күптән түгел 5-се һәм 8-се синыфтарға уҡыусылар ҡабул иттек. 8-сегә 50 дәғүәсе араһынан -16 уҡыусы һәм 5-се синыфҡа 40 дәғүәсе араһынан 20 уҡыусыны әңгәмә нигеҙендә һайлап алдыҡ. Уҡыусыларға ҡытлыҡ кисергәнебеҙ юҡ. Беҙ, уҡытыусылар, балаларға ҡанат ҡуябыҙ, ә улар үҙҙәренең уңыштары менән беҙгә ҡанат ҡуя.

**Фәһим БОҪҠАНОВ, Күмертау ҡалаһының 3-сө башҡорт гимназия-интернаты директоры:** Быйыл беҙҙең мәктәпте 55 уҡыусы тамамланы. Миҙалсыларыбыҙ һаны -алтау: биш көмөш һәм бер алтын. Бөгөн ауылдарҙа мәктәптәр ябыла, уҡытыусылар һаны ла ҡыҫҡартыла. Был үҙ сиратында балаларҙың белем кимәленә лә тәьҫир итә. Урта белем биреү мәктәптәре төп белем биреү мәктәбе булып ҡына, ә төп белем биреү усағы - башланғыс мәктәпкә генә ҡалдырылыуы арҡаһында күп кенә ауылдарҙан балаларын тап беҙҙең интернатҡа алып килергә тырыша ата-әсә. БДИ-ны яҡшы ғына тапшырҙылар, быйылғы сығарылыш уҡыусыларыбыҙға ла был тормошта үҙ урынын табыуҙарын теләйем. Мәғариф өлкәһендә һуңғы йылдарҙа йыш үткәрелгән тәжрибәләрҙең ҡайһы яҡҡа - яҡшығамы, насарғамы икәнлеген аңлап та, төшөнөп тә өлгөрөп булмай ҡайһы саҡта. БДИ системаһын да тәртипкә һалырға кәрәк.

**Роза БИКБОВА, Сибай башҡорт гимназия-интернаты директоры:** Быйыл гимназияны 60 уҡыусы тамамланы, улар араһында 1 алтын, 1 көмөш миҙалсы бар. Уҡыу сифаты 77 процент тәшкил итә, 10 уҡыусының 8-е уҡыу йылын "4"ле һәм "5"ле билдәләренә тамамланы. РФ субъекттарынан, атап әйткәндә, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләренән 8 бала тамамлай. Уларға икенсе аҙнала Мәғариф министрлығынан юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән саҡта ярҙам итәсәк йүнәлтмәләр тапшырыласаҡ. Предметтарҙы башҡорт телендә уҡытмаһаҡ та, төбәк компоненты иҫәбенә тел һәм әҙәбиәт дәрестәрен байтаҡҡа арттыра алдыҡ. Гимназияла 26 түңәрәк эшләй. Бөтәһе 280 балаға бүлгәндә һәр баланың ниндәй ҙә булһа түңәрәктә шөғөлләнеү мөмкинлеге булдырылған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һуңғы осорҙа инновацион иҡтисад, көслө дәүләт, глобаль конкурентлыҡҡа һәләтлелек тураһында күп һөйләнелә. Быларға өлгәшеү өсөн йәмғиәткә һәләтле, йүнсел һәм, әлбиттә, белемле белгестәр кәрәклеге тураһында Рәсәй президенты Дмитрий Медведев та белдергәйне. Бөгөнгө көндә төрлө тәжрибәләр үткәреү менән йышыраҡ мауыҡҡан мәғариф өлкәһе ул проблемаға нисек ҡарайҙыр, әммә белгестәр тәрбиәләүҙең башланғыс баҫҡысы булған мәктәптәр үҙенең изге бурысын тейешенсә башҡара - шуныһы һөйөндөрә.**

**Ләйсән НАФИҠОВА,**
**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓1 июлдә Истанбулда "Топкапы" паркындағы төрки телле халыҡтарҙың музей комплексында яңы экспозиция - музей Башҡорт халҡының тарихы һәм этнографияһы йорто асыла.

✓2 июлдән 10 июлгә тиклем баш ҡаланың "Мираҫ" бейеү фольклор ансамбле Анкаралағы дүртенсе Халыҡ-ара фестивалдә сығыш яһаясаҡ. Төркиә республикаһында был фестивалде үткәреү традиционға әйләнгән. Фестиваль сиктәрендә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов Анкара ҡалаһы мэры Мелих Гекчек менән осрашасаҡ. Былтыр "Мираҫ" ансамбле был сарала ҡатнашҡайны инде һәм Төркиәнең бер нисә ҡалаһында сығыш яһағайны.

✓Росстат мәғлүмәттәре буйынса, илдең иң бысраҡ ҡалалары исемлегендә Башҡортостандың дүрт ҡалаһы бар: Өфө, Нефтекама, Стәрлетамаҡ, Салауат. Былтыр Өфө ҡалаһы атмосфераһына 134 мең тонна сәнәғәт ҡалдыҡтары ташланған. Күршеләрҙә күрһәткестәр кәмерәк. Ҡаҙанда, мәҫәлән, был күрһәткес 29 мең тонна тәшкил итә. Ә бына Магнитогорск ҡалаһында атмосфераға йылына 232 мең тонна сәнәғәт ҡалдыҡтары ташлана.

✓Республиканың өс йәшкә тиклем декрет ялында булған ҡатын-ҡыҙҙары яңы белем алыу мөмкинлегенә эйә. БР Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, теләге булған һәр йәш әсә бер ниндәй түләүһеҙ үҙенең профессионал кимәлен камиллаштыра йәиһә бөгөн кәрәклерәк булған башҡа һөнәр үҙләштерә ала. Быны өсөн урындарҙағы мәшғүллек үҙәктәренә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

✓Өфө ҡала Советы депутаттары эске рекламала тәртип булдырырға планлаштыра. Хәҙер эске реклама эскәмйә һәм ҡойма-ҡоролмалар рәүешендәге яңы реклама саралары менән тулыланды. Шуға ярашлы, был сараларҙы урынлаштырған өсөн түләү тәртибе индерелә. Әммә тәүге йылда бындай ҡоролма хужалары түләүҙән азат ителә.

✓Яҡын арала Башҡортостанда "Республиканың тукланыу продукттары" тигән программа эшләнәсәк. Был хаҡта онлайн-конференция ваҡытында БР Президенты хәбәр итте. Уның фекеренсә, кешеләргә урындағы етештереүселәргә ярҙам итеү зарурлығын аңларға булышлыҡ итеүсе программа кәрәк. Бындай стратегия төбәк өсөн иҡтисади яҡтан һөҙөмтәле, кешеләр өсөн хәүефһеҙ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БЫНДАҒЫ ДАУАЛАУ ЫСУЛЫ -

## һөлөк, ҡорттан саҡтырыу, үләндәр...





**Баш ҡалала Халыҡ медицинаһы һәм апитерапия республика үҙәге асылды. Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең структур бүлеге булған был учреждение халыҡты традицион һәм халыҡ медицинаһы, умартасылыҡ продукттары ярҙамында төрлө ауырыуҙарҙан дауалаясаҡ.**

Өфөнөң Сипайлово биҫтәһендә урынлашҡан был дауалау үҙәге кеүек учреждениелар Рәсәйҙең бер төбәгендә лә юҡ. Әлеге ваҡытта заманса медицина ҡоралдары менән йыһазландырылған үҙәктә физиотерапия, акушерлыҡ һәм гинекология, дерматовенерология, кардиология, неврология, һөнәри патология, пульмонология, ревматология, рефлексотерапия, терапия, ультратауышлы диагностика, урология, физиотерапия, функциональ диагностика, эндокринология, гастроэнтерология, хирургия һәм башҡа йүнәлештәр буйынса эшмәкәрлек башланған, шулай уҡ үҙәктә медицина тикшеренеүҙәре үтергә, теш дауаларға, массаж курстарына йөрөргә лә була.

Үҙәкте ойоштороусыларҙың төп маҡсаты - ауырыуҙарҙы медицинаның рәсми танылған алымдарын халыҡ медицинаһы ысулдары менән берләштереп дауалау һәм, әлбиттә, ауырыуҙарҙы алдан иҫкәртеү. Үҙәктең юғары квалификациялы белгестәре һөлөк ҡуйып, бал ҡортонан саҡтырып, төрлө үләндәр менән дә дауалаясаҡ, консультациялар бирәсәк. Һыу терапияһы, тоҙ шахталары ла һаулыҡты нығытырға ярҙам итәсәк. Бал, прополис һәм башҡа умартасылыҡ продукцияһы һәм улар нигеҙендә яһалған төрлө дауалау һәм косметик саралар үҙәк табиптары эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлеше булып торасаҡ.

Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов әйтеүенсә, үҙәк республиканың ҡала һәм райондарынан да дауаланырға теләүселәрҙе ҡабул итәсәк. Иртәнге һигеҙҙән һиске унға тиклем эшләйәсәк үҙәктә көндәҙгә стационар ҙа ойошторолған.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**




ҺОРАУ-ЯУАП

## БАЛАЛАР ХАҠЫНА

**Биш бала (14, 13, 11, 8 һәм 6 йәшлектәр) үҫтерәм. Ирем гражданлыҡ никахы менән икенсе ғаиләлә йәшәй. Рәсми айырылышҡан осраҡта балаларҙы яңғыҙ тәрбиәләүсе күп балалы әсә булараҡ, ниндәй социаль льготалар һәм хоҡуҡтар менән файҙалана алам?**

- РФ Президентының 1992 йылдың 5 майындағы 18 йәшкә тиклемге өс һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ғаиләләр өсөн "Күп балалы ғаиләрҙе социаль яҡлау саралары тураһында" Указ менән түбәндәге льготалар ҡаралған:

- йылылыҡ, һыу, канализация, газ һәм электр энергияһы менән файҙаланған өсөн билдәләнгән түләү хаҡына, ә үҙәк йылытыу системаһына тоташтырылмаған йорттарҙа йәшәүсе ғаиләләр өсөн - үҙҙәренең йәшәү урыны буйынса билдәләнгән норма сиктәрендә һатып алынған яғыулыҡ хаҡына 30 проценттан да кәм булмаған ташлама биреү;
- 6 йәшкә тиклемге балалар өсөн врач рецепттары буйынса бушлай дарыу алыу;
- ҡала эсендәге трамвай, троллейбус, метрополитен һәм таксиҙан башҡа ҡала йүнәлешендәге автобустарҙа, ә дөйөм белем биреү мәктәптәре уҡыусылары өсөн ҡала яны һәм район эсендәге йүнәлештәрҙә бушлай йөрөү;
- мәктәпкәсә учреждениеларға тәү сиратта ҡабул итеү;
- дөйөм белем биреү һәм һөнәрселек уҡыу йорттарында уҡыусылар өсөн бушлай туҡланыу (иртәнге һәм төшкө аш);
- дәрескә йөрөү өсөн мәктәп формаһы йәки уны алыштырыусы балалар кейеме комплекты, шулай уҡ балалар мәктәптә уҡыған бөтә осорғаса спорт кейеме менән билдәләнгән нормативтарға ярашлы бушлай тәьмин итеү;
- музейҙар, ял йорто һәм культура парктарына, күргәҙмәләргә айына бер тапҡыр бушлай йөрөтөү;
- крәҫтиән (фермер) хужалығы, бәләкәй эшҡыуарлыҡ һәм башҡа коммерция структуралары ойошторорға теләүселәргә ярҙам, был маҡсаттар өсөн ер участкалары менән тәьмин итеү, шулай уҡ ергә һалым һәм ҡуртым өсөн түләүҙә һалымдан тулыһынса йәки өлөшләтә азат итеү йәки налог ставкаһын түбәнәйтеү рәүешендә ташлама менән тәьмин итеү;
- крәҫтиән (фермер) хужалығын үҫтереү өсөн сығымдарҙы ҡаплауға процентһыҙ ссуда йәки бушлай матди ярҙам күрһәтеү; эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән физик шәхестәрҙән түләтелеүсе теркәү йыйымынан тулыһынса азат итеү;
- ғаилә башына 0,15 гектарҙан да кәм булмаған күләмдә баҡсасылыҡ участкаһы менән тәү сиратта тәьмин итеү;
- төҙөлөш материалдары һатып алыуға һәм торлаҡ төҙөүгә процентһыҙ ссуда, ташламалы нигеҙҙә кредиттар, дотациялар менән тәьмин итеү.

Былар күп балалы ғаиләләр өсөн федераль кимәлдә ҡаралған төп льготалар исемлеге булды, ләкин бынан тыш урындағы власть органдары ошо биләмәлә йәшәүсе әлеге категория граждандарға өҫтәлмә льгота саралары тәғәйенләй ала. Был хаҡта ентекләберәк йәшәгән урын буйынса халыҡты социаль яҡлау органына барып белешергә мөмкин.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Диабет



❖ Ярты стакан ерек япрағы, 1 ҡалаҡ вағыраҡ кесерткән япраҡтары, 2 ҡалаҡ алабута япрағын ваҡ итеп турарға һәм 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, тулыһынса һыуынғансы тынәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 2 мәртәбә: иртә менән ашар алдынан ярты сәғәт алда һәм кисен йоҡларға ятыр алдынан 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Төнәтмәне һыуытҡыста өс көндән күберәк тотмаҫҡа. Был дауа ҡандағы шәкәрҙе кәметә.

❖ Ике бөртөк аҡ фасолде тәнгәләккә 100 мл ҡайнап һыуытылған һыуға һалып ҡалдырырға. Иртәнсәк ашар алдынан шуны ашарға һәм һыуын эсергә.

### Үт ҡыуҙырыу

Үт ҡыуығында үт һәм ваҡ таштар тығылһа, 500 мл араҡыға 2 ҡалаҡ сусҡа үте шыйыҡсаһын ҡушырға һәм өс көн һыуытҡыста тоторға. Шунан һөҙөргә, иртәле-кисле ашарҙан 30 минут алда 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Артынан бер нәмә лә эсмәҫкә һәм ашамаҫҡа. Бер нисә көндән йыйылған үт сыҡҡас, бауырҙа еңеллек һиҙерһегеҙ, үҙәк тә көймәҫ.

### Ҡолаҡ шаулаһа

Ҡолаҡ шаулап, баш ауыртһа, 2 ҡалаҡ туҡранбашты 0,5 литр ҡайнар һыуҙа төнәтергә. Көнөнә 3-4 мәртәбә ашар алдынан йылы көйөнсә ярты ышар стакан эсергә. Был төнәтмә юғары ҡан баҫымынан һәм ҡолаҡтар шаулауынан да дауалай.

### Бәпкә үләне

Бер стакан ҡайнар һыуға 2-3 ҡалаҡ кипкән үләнде һалып, ҡапҡас менән ябып, 20 минутҡа йылы урынға ҡуйһың. Көнөнә 4 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсәһең. Ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан бик файҙалы. Туберкулездан, бауыр, бөйәр сиренән, эс китеүҙән дә дауалай. Бөйөрҙәге ташты ла иретеп ҡыуа. Үләнде сәскә атҡан саҡта йыяһың. Салат яһарға, бәлеш бешерергә лә була, ашҡа ла ҡушаһың.

### Баш әйләнгәндә

Ул саҡта 20 дүләнә еләген 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, 10 минут утта торға һәм сәй урынына эсергә. Көнө буйы күпме эсә алаһың, шунса эсегеҙ, зыяны юҡ. Япрағын, сәскәһен дә ҡулланырға була.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Ҡулымда ғәрәп графикаһы менән яҙылған китап. Ҡарап тороуға шул тиклем дә матур, серле хәрефтәр. Ниҙәр яҙылған икән унда? Ҡыҙыҡһынып ҡарап сығыуҙан башҡа бер ни ҙә эшләтә алмайым шул мин был серле китапты, һүҙҙәренең мәғәнәһенә төшөнмәү генә түгел, әлифте таяҡ тип тә белмәйем хатта. Ә бит нисәмә быуаттар буйы ата-бабаларыбыҙ ошо ғәрәп графикаһында яҙған, уҡыған, тарихыбыҙ, үткәнебеҙ тураһындағы мәғлүмәттәр ошо яҙыуҙарҙа йәшеренгән. Уларҙағы серҙәргә төшөнөүселәр бөгөн, бәхетһеҙ, Башҡорт дәүләт университетының Көнсығыш телдәре кафедраһында белем ала икән. Көнсығыш телдәре кафедраһы етәксеһе, филология фәндәре кандидаты, доцент, республиканың Ш.Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Ғәйнислам Дәүләтбай улы ИБРАҺИМОВ ошо хаҡта мәғлүмәт бирә:**



# ТЕЛДЕ ӨЙРӘНҺӘҢ...

## Ҡытайға ла алыҫ түгел

- 2006 йылда Башҡортостанда шәрҡиәтселәр съезы үткәрелгәйне. Ошо съезд ваҡытында республиканың юғары уҡыу йорттарының береһендә Көнсығыш телдәре, әҙәбиәте, тарихын өйрәнеү буйынса белгестәр әҙерләй башлау фарыҙлығы тураһында һүҙ алып барылды. Шәрҡиәтселәр йәмғиәте президенты Р.Б.Рыбаков ошо турала республика Президентына хат та яҙҙы. Шулай, 2008 йылдың 2 апрелендә Башҡорт дәүләт университеты ректоры "Көнсығыш телдәре кафедраһы булдырыу" тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Беҙ әле "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, сит телдәр" йүнәлеше буйынса ғәрәп, фарсы, төрөк, ҡытай телдәренән уҡытабыҙ. Шулай уҡ студент ике тел (башҡорт теле һәм бер сит тел) өйрәнеүҙән тыш, үҙ теләге менән тағы ла бер сит телде үҙләштерә ала. Быйылғы йылдан башлап "Көнсығыш һәм Африка илдәрен өйрәнеү" йүнәлешенең "Азия һәм Африка илдәре телдәре һәм әҙәбиәттәре" буйынса уҡыта башлайбыҙ. Абитуриенттарға рус теленән, тарихтан, география-нан БДИ тапшырырға кәрәк буласаҡ, һәм беҙ бюджет нигеҙендә студенттар ҡабул итергә йыйынабыҙ. Тәү сиратта, башҡорт телен камил белгән, аттестаттарында башҡорт теленән имтиханы күрһәтелгән студенттарҙы аласаҡбыҙ. Сөнки беҙҙә уҡытыу программаһына башҡорт теле, әҙәбиәте, тарихы буйынса күп кенә дәрестәр индерелгән, шуға ла был бүлектә башҡорт телен белмәүселәрҙең уҡый алыуы икеле.

Ике баҫҡыслы уҡытыуға күсергә йыйынабыҙ: бакалавриат һәм магистратура. Бакалавр йүнәлешенең бер уңайлы яғы бар: әгәр ҙә студент уҡыуын уңышлы тамамлаһа, артабан Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа йә сит ил юғары уҡыу йортона барып, белемен артабан магистратурала камиллаштыра ала. Ә унан һуң - докторантура. Ғөмүмән, беҙҙең бүлекте тамамлаусылар өсөн мөмкинлектәр күп төрлө. Сығарылыш студенттарыбыҙ Көнсығыш илдәренең төрлө төҙөлөш һәм һатыу итеү фирмаларында тәржемәсе сифатында эшләй, тағы ла мәҙәни, иҡтисади йүнәлештә эш алып барған министрлыҡтарҙа Көнсығыш телдәре буйынса белгес булараҡ эш таба ала. Ғилми-тикшеренеү институттарында, архивтарҙа, китапханаларҙағы һирәк ҡулъяҙмалар фондында телде яҡшы белгән белгестәр юҡ. Беҙҙең студенттар унда ла эш урыны таба аласаҡ. Шулай уҡ мәктәптә башҡорт теленән уҡытырға була. Бөгөн республиканың, Рәсәй хөкүмәтенең сит илдәр менән, тәү сиратта, Көнсығыш илдәре менән бәйләнеше көндән-көн арта. Тимәк, быға тиклем билдәле булмаған яңы тарихи документтарға, халҡыбыҙға бәйле ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә лә юл асыла. Ә беҙҙә әлеге мәлдә тәүсығанаҡтар менән эш итә белеүсе белгестәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Ә ғилемдә тәүсығанаҡ менән эш итә белеү мөһим. Зәки Вәлиди, Абдулҡадир Инан, Ғәлимйән Таған кеүек ғалимдарыбыҙҙың ошо тәүсығанаҡтар менән эш итә белеүе уларҙың хеҙмәтен баһалап бөткөһөҙ иткән.

Тағы ла әйтеп үтергә кәрәк, уҡыу барышында беҙ студенттарыбыҙҙы Башҡорт дәүләт университеты менән тығыҙ бәйләнештә булған сит ил юғары уҡыу йорттарына стажировкаға ебәрәбеҙ. Мәҫәлән, Ҡытайҙың Ляонин университеты, Ирандың Тегеран университеты, Төркиәнең Анкара, Эгей университеттарына йыл да барып, белемдәрен камиллаштырып ҡайтыусылары бар. Әйткәндәй, ҡытай телен өйрәнеү йүнәлеше буйынса беҙ әлегә бер төркөм генә уҡытып сығарҙыҡ. Бының өсөн Ляонин университеты белгестәр ебәргәйне, быйыл теләүселәр булһа, тағы ла төркөм йыйырға иҫәп тотабыҙ. Сөнки Ҡытай архивтарында башҡорттарға ҡағылышлы төрлө ҡиммәтле мәғлүмәттәр барлығы билдәле, беҙгә киләсәктә шуларҙы өйрәнеү юҫығында эш алып барыусы белгестәр кәрәк. Стажировкаға килгәндә инде, уға әләгеү өсөн тик яҡшы уҡыу, төрлө конкурстарҙа әүҙем ҡатнашыу, телде белеү генә талап ителә. Сөнки белемен камиллаштырырға теләгән студенттың юлын, йәшәүен, ашауын, уҡыуын тулыһынса ҡабул итеп алған яҡ хәстәрләй, йә булмаһа, юл хаҡын Башҡорт дәүләт университеты үҙе түләй, ә ҡалған сығымдарҙы ҡабул итеп алған яҡ ҡаплай. Быныһы студент өсөн бик уңайлы, әлбиттә.

Бөгөнгө көндә кафедрала ете уҡытыусы эшләй, улар араһында филология фәндәре докторы Э. Ишбирҙин, өлкән уҡытыусылар А.Бәхтейәрова, В.Аллаҡаева, Абдул Манан Обайд Голь һәм ике ассистент бар. Киләсәктә беҙҙең рәттәр бөгөнгө көндә аспирантурала уҡып йөрөүсе студенттарыбыҙ менән тулыланыр, тип өмөтләнәбеҙ.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ФАРСЫНЫҢ ДА...

## кәрәге тейеүе бар

**Ғәйнислам Дәүләтбай улы һөйләгән Көнсығыш телдәре бүлегендә уҡый Айһылыу Заһиҙуллина. Ул быйыл Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының Азия һәм Африка илдәре институты тарафынан уҙғарылған фарсы теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадала ҡатнашҡан. Әңгәмәбеҙ Көнсығыш телдәрен өйрәнеү, бындай белгестәргә ихтыяж тураһында.**

**- Бөгөн бар донъя инглиз телен өйрәнеүҙе өҫтөн күргән ваҡытта ни өсөн һин фарсы телен һайланың?**

- Фарсы теленә ҡарата миндә мәктәп йылдарында уҡ ҡыҙыҡһыныу тыуғайны. Һигеҙенсе синыфта уҡығанда әсәйемдең олатаһынан ҡалған ғәрәп графикаһы менән яҙылған китап ҡулыма килеп эләкте. Ул китаптың матур тышлығы, эстәлеге хайран итте. Миндә был китапты уҡып сығыу теләге уянды. Һәм мин ғәрәп әлифбаһы табып алып, хәрефтәрҙе үҙ аллы өйрәнә башланым. Олатайымдың теге серле китабы Ғабдулла Туҡайҙың шиғырҙар йыйынтығы булып сыҡты. Әлбиттә, Көнсығыш телдәре буйынса артабан да белем алыу теләге ҙур ине һәм БДУ-ла Көнсығыш телдәре кафедраһы барлығы тураһында ишеткәс, һис шикһеҙ, шунда уҡырға барасағымды атаәсәйемә еткерҙем. Улар теләгемә ҡаршы килмәне. Киреһенсә, улар һәр ваҡыт олатайым, ҡартатайымдың ғәрәп, фарсы телдәрен яҡшы белеүе, уҡымышлы булыуы тураһында һөйләп, мине дәртләндереп торҙо.

**- Беренсе курста уҡығанда уҡ Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының Азия һәм Африка илдәре институты тарафынан уҙғарылған фарсы теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадала ҡатнашырға өлгөргәнһең...**

- Эйе, фарсы теленән уҡытыусыбыҙ Абдул Манан Обайд Голь биргән белем, тырышлыҡ менән беренсе курста уҡ был олимпиадаға барыу насип булды. Минең тырышлығымды күреп, әле телде яҡшылап белмәһәм дә, үҙ күҙҙәрең менән күреп, олимпиада шарттары менән танышып ҡайтырһын, тип ышаныс күрһәтеүсе уҡытыусыма рәхмәт. Әйтергә кәрәк, был бәйге махсатыма табан бер аҙым булды. Сөнки белем кимәлемде һынап ҡараным, артабан ҡайһы юҫыҡта эшләргә, нимәгә өҫтөнлөк бирергә икәнлеген самалап ҡайттым. Шулай уҡ Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән йыйылған йәштәштәрем күп булыуы һөйөндөрҙө. Ҡыҙғаныска күрә, былтыр был бәйгегә бара алманым. Ә быйыл иһә 22-23 ғинуарҙа уҙғарылған ошо уҡ олимпиадаға курсташым Эльвира Вәлишина менән икәүләп барып ҡайттыҡ. Олимпиаданан алып ҡайтҡан тәьҫораттарым белем кимәлемә бәйле, тип әйтәйемме. Ни өсөн тигәндә, бәйгелә булып, башҡалар менән аралашып, белем кимәлемде һынап ҡайтҡандан һуң, бөгөн миңә фарсы телен яҡшы белеүселәр менән аралашыу етмәй, тип әйтә алам. Әлбиттә, уҡытыусым Абдул Манан менән фарсы телендә һөйләшәбеҙ, әммә комплекслылыҡ, тартыныу тойғоһо ҡамасаулай барыбер. Фарсы телен һыу кеүек эскән яҡын дуҫтар кәрәк.

**- Уҡыуҙа яҡшы өлгәшеүселәрҙең Иранға барыу мөмкинлеге бар икән. Ә һин, Айһылыу, яҡын арала сит илгә уҡырға китергә йыйынмайһыңмы?**

- Иранға барыу хыялым ҙур, әммә был сараға әләгеп китеүе бик ауыр. Беҙ йыл һайын Ирандан ебәрелгән махсус анкета тултырабыҙ һәм шуның һөҙөмтәләре буйынса беҙҙе Тегеран университетына ике йылға уҡырға ебәрергә тейештәр. Бөгөнгө көндә унда Зәлифә исемле ҡыҙ белемен камиллаштыра. Ә мин быйыл тултырған анкетабыҙҙың һөҙөмтәләрен көтәм. Әйткәндәй, был анкетаға ниндәй конкурс-олимпиадаларҙа ҡатнашыуың хаҡында ла яҙырға кәрәк. Был графаға быйыл минең фарсы теле олимпиадаһында ҡатнашыуымдан тыш, М.Буранғоловтың "Урал батыр" эпосын яҙып алыуына 100 йыл тулыу айҡанлы эпосты сит телдәрҙә яттан һөйләүселәрҙең беренсе конкурсы дипломанты булыуым да өҫтәлде. Беҙ был конкурста "Урал батыр" эпосын курсташтарым менән фарсы теленә үҙебеҙ тәржемә итеп ҡатнаштыҡ. Әлбиттә, тулыһынса тәржемә итеп бөтә алманыҡ, тексыбыҙ тик шиғри юлдарҙан да торманы. Әммә конкурстың "Тәржемә бөтөнлөгө өсөн" дипломын яуланыҡ.

**- Алған белемеңде киләсәктә нисек файҙаланырға уйлайһың?**

- Килеп сыҡһа, мотлаҡ тәржемәсе булып эшләргә хыялланам. Рәсәй һәм Иран араһындағы мөнәсәбәттәр йылынып бара. Ике ил, ике халыҡ араһында элек-электән йәшәп килгән бәйләнештәр, бәлки, тағы ла әүҙемләшер. Тарих ҡабатлана, тиҙәр. Фарсы теле лә киләсәктә халҡыбыҙға хеҙмәт итеүе мөмкин. Нисек кенә булмаһын, Көнсығыш телдәре һәр ваҡыт башҡорттар өсөн кәрәкле һәм мөһим булып ҡаласаҡ. Исмаһам, шул уҡ тарихыбыҙҙы төптәнерәк өйрәнеү өсөн булһа ла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тел Ҡытайға тиклем алып барып еткергән, тиҙәр. Башҡорт дәүләт университетының Көнсығыш телдәре кафедраһында уҡыусылар быға күптән инанған инде. Бының өсөн тик бер генә шарт ҡуйылған улар алдына: сит телде яҡшы өйрәнеү. Был шарт ҙур мөмкинлектәргә кескәй ишек төҫлө. Барыһы ла асып инә алмай, әммә асыусылар алдында офоҡтоң киңлегенә хайран ҡалырлыҡ, тик уны ваҡытында күрә белер кәрәк, унан инде Ҡытайға ла алыҫ түгел.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# БАШҠОРТ ЙӘЙЛӘҮҘӘРЕ



## Беҙ улар хаҡында нимә беләбеҙ?

### Архивта һаҡланған мәғлүмәттәр

Тағы шуны әйтергә кәрәк, "кочевое" төшөнсәһен беҙ "күсмә" тип тәржемә итеп яҙабыҙ. Ә башҡорттар үҙҙәрен күсмә халыҡ тип һанағанмы һуң? Мәҫәлән, XX быуат башына тиклем әле малдарын йәйләүҙәргә сығарып көткән көньяҡ-көнсығыш башҡорттары (атап әйткәндә, Йылайыр, Хәйбулла райондарында) борондан күсмә халыҡ тип күрше ҡаҙаҡтарҙы атап йөрөткән. Хатта был төшөнсә халыҡ хәтерендә бөгөн дә һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, бер урында тормай күсенеп йөрөгән кешегә "күсмә ҡаҙаҡ" тиҙәр.

Хәҙер инде йәйләүҙәрҙең үҙҙәренә күсәйек. Беҙ борон-борондан башҡорт халҡы йәмле йәй көндәрен йәйләүҙәрҙә үткәргәнен беләбеҙ. Йәйләүҙәр тураһында бик матур халыҡ йырҙары беҙҙең көндәргә килеп еткән. Әммә бөгөн беҙ бороңғо ата-бабаларыбыҙҙың ҡайһы ерҙәрҙә йәйләгәнен беләбеҙме һуң? Халыҡ хәтерендә һаҡланып ҡалғанмы был?

Башҡортостан Республикаһының Үҙәк дәүләт архивында йәйләүҙәргә ҡағылышлы бик уникаль документ һаҡлана. Унда XIX быуаттың урталарындағы башҡорт йәйләүҙәре хаҡында мәғлүмәт тупланған. Был документта һәр башҡорт ауылының йәйләүе ҡайҙа урынлашыуы, күпме территорияны биләүе тураһында бәйән ителә.

Тәүҙә был документтың барлыҡҡа килеү тарихына туҡталып китмәксемен. Үткән быуаттарҙа башҡорт ерҙәрен күпме генә тартып алыуға ҡарамаҫтан, батша властарының нәфсеһе һаман да ҙур була. Улар тәү сиратта башҡорт йәйләүҙәре биләгән ерҙәргә ҡыҙыҡһына. Шуға күрә лә 1864 йылдың апрелендә Өфөлә ултырған граждан губернаторы етәкселегендәге Статистика комитеты үҙенең ултырышында башҡорт йәйләүҙәре тураһында тулы мәғлүмәт йыйырға ҡарар итә һәм 1864 йылдың 31 майында түбәндәге хат менән Ырымбур генерал-губернаторы Н. А. Крыжановскийға мөрәжәғәт итә:

"В общем заседании Оренбургского Статистического Комитета от 23 минувшего апреля постановлено было предпринять, некоторые картографические работы по Оренбургской губернии по разным категориям, между прочим и с обозначением местности башкирских кочевок, как ныне существующих, так в особенности тех, которые существовали до того времени, когда кочевка была запрещена.

Потребность определения сказанных местностей мотивировано в журнале заседания следующими основаниями: во первых, полосы кочевок обозначают вместе с тем и районы преобладающего скотоводства, потому что настоящие кочевники и по сие время более скотоводы, чем хлебопашцы и многие из них де факто и теперь имеют свои кочевки в течение летних месяцев по крайней мере до уборки хлеба; во вторых, площади кочевок, бывших и существующих, составляют, без всякого сомнения, богатейшие запасы для предстоящей культуры и должны быть приняты в расчет в деле колонизации; в третьих, наконец, известно, что местности кочевок самые лучшие и благоприятные для здоровья и надо удивляться, как полудикие, в свое время, башкирцы умели, по инстинкту выбирать эти местности, поэтому определение же составит хороший материал для медицинской топографии.

В надежде, что Вы, Милостивый Государь, разделите предложение Комитета и не откажетесь от просвещенного содействия ему, я имею честь покорнейше просить Вас употребить зависящия средства к собранию по здешней губернии изложенных сведений и если найдете возможность, то и составлению карты с обозначением этих местностей..."

### Тарихи сығанаҡ булыуы яғынан файҙалы

Хаттан күренеүенсә, батша властары башҡорт йәйләүҙәрен барлап сығып, киләсәктә колонизацияларға иҫәп тотҡан. Үҙҙәрен үтә лә ныҡ аҡыллы, алдынғы һәм цивилизациялы тип һанаған колонизаторҙар башҡорттарҙың йәйләү урындары итеп шундай матур һәм һауалыҡ өсөн файҙалы ерҙәрҙе һайлай белеүенә ғәжәпләнеп, "полудикие, в свое время, башкирцы умели, по инстинкту выбирать эти местности", тип үҙҙәренсә һығымта яһаған. Башҡорттар, "үтә аҡыллы" батша чиновниктары әйткәненсә, йәйләү урындарын "инстинкт" буйынса түгел, ә меңәр йылдар буйына йыйылған тәжрибә, аҡыл менән һайлаған. Быны ошо замандарҙан килә инде башҡорт халҡына "кочевой", "полудикий" тип тағылған ярлыҡтар.

Ырымбур генерал-губернаторы кантон башлыҡтарына башҡорт йәйләүҙәре тураһында мәғлүмәт йыйып бирергә бойора. Әммә "не может быть сделано распоряжения о составлении карты означенным местностям по неимению в виду свободных специальных чинов", тип хәбәр итә Статистика комитеты рәйесенә. Шулай итеп, кантондарҙан Статистика комитетына башҡорт йәйләүҙәре тураһында мәғлүмәттәр ебәрелә башлай. Үкенескә ҡаршы, үрҙә телгә алынғанса, уларҙың карталарын эшләргә мөмкинлек булмай. Шулай ҙа колонизаторлыҡ сәйәсәте заказы буйынса йыйылған мәғлүмәттәр бөгөн башҡорт халҡының тарихын өйрәнеү өсөн уникаль бер сығанаҡ булып тора.

Билдәле булыуынса, XIX быуат уртаһында инде төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, көслө колониялаштырыу һөҙөмтәһендә күп ерҙәрен юғалтып, малдары ҡырҡа кәмеп, йәйләү ысулы менән мал көтөүҙән күптән баш тартҡан булған. Уларҙың төп шөғөлө игенселек була. Шуға күрә лә Бөрө өйәҙенә ҡараған 6-сы Бөрө кантоны начальнигы: "во вверенном мне кантоне, по Бирскому Уезду, местностей башкирских кочевок нет, так как главную промышленность башкир этого уезда с давнего времени составляет хлебопашество", - тип хәбәр итә. Минзәлә өйәҙенә ҡараған 7-се Минзәлә кантоны (бөгөнгө Татарстан территорияһында ингән башҡорт ерҙәре) начальнигы ла кантонда йәйләүҙәр юҡ, тип яҙа.

**Азат ЮЛАН.**
**(Дауамы бар).**

АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР

**Мирсалих Мирсәлим улы Биксурин XIX быуатта Башҡортостандың мәғариф тарихында, фән һәм мәҙәниәт үсешендә үҙенсәлекле эҙ ҡалдырған эшмәкәрҙәребеҙҙең береһе. Ул 1819 йылда Ырымбур губернаһында бөлгөнлөккә төшкән дворян ғаиләһендә тыуған. 1830 йылда Ырымбурҙағы Неплюев хәрби училищеһына уҡырға инеп, 1838 йылда, коллежский регистратор дәрәжәһенә лайыҡ булып, ҙур уңыш менән тамамлай.**

# МИРСАЛИХ БИКСУРИН

## (1819-1903)

Башта Ырымбур сик буйы комиссияһында тәржемәсе вазифаһын башҡара. Тиҙҙән Неплюев кадетлыҡ корпусына ғәрәп, фарсы һәм башҡорт, татар, ҡаҙаҡ телдәре уҡытыусыһы булып урынлаша, ғүмеренең төп өлөшөн ошо эшкә арнай. 1850-1869 йылдарҙа бер үк ваҡытта ҡаҙаҡ балалары мәктәбендә рус, ҡаҙаҡ, татар телдәрен уҡыта. 1960 йылдар уртаһында, тәржемәсе булараҡ, рус армияһының Урта Азияға хәрби походтарында ҡатнаша, Төркөстан делегацияһы составында баш тәржемәсе сифатында Санкт-Петербургҡа бара. Юғары хәрби звание - генерал дәрәжәһен алыуға өлгәшә. Фән, ғилем өлкәһендәге хеҙмәттәре, педагогик эшмәкәрлеге өсөн Рәсәй география йәмғиәтенең ағза-хеҙмәткәре һәм ошо йәмғиәттең Ырымбур бүлегенең тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп һайлана, орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Уның шәкерттәре араһында башҡорттоң һәм ҡаҙаҡтың атаҡлы мәғрифәтселәре М. Өмөтбаев һәм И. Алтынһарин һымаҡ оло шәхестәр бар. 1879 йылда отставкаға сығып, Ырымбур губерна канцелярияһында штаттан тыш махсус йомоштар чиновнигы бурысын үтәй башлай.

Мирсалих Биксуриндың ғилми-педагогик эшмәкәрлегендә айырыуса ҡиммәтле бер хеҙмәт бар. Уның төп нөсхәһендә тулы исеме ошондай: "Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана с русско-персидско-татарскими словами, расположенными по предметам, разговорами и прописями". Китап ике мәртәбә нәшер ителә: 1-се баҫмаһы Ырымбурҙа, 1859 йылда; 2-се баҫмаһы Ҡаҙанда, 1869 йылда баҫылып сыға /Тикшеренеүселәр уны, ғәҙәттә, ҡыҫҡаса "Начальное руководство..." йәки "Башланғыс ҡулланма..." тип йөрөтә/.

"Башланғыс ҡулланма..." - күп йәһәттән бик үҙенсәлекле хеҙмәт. Автор башҡорт, ҡаҙаҡ, татар телдәренең фонетик һәм грамматик төҙөлөшөн йыш ҡына ғәрәп, фарсы һәм рус телдәре менән сағыштырыу планында тикшерә. Хеҙмәт был йәһәттән башҡорт һәм, ғөмүмән, төрки тел белемендә ҡәрҙәш телдәрҙе сағыштырма өйрәнеүҙең тәүге тәжрибәһе иҫәпләнә. Күргәҙмә материалдар сифатында М. Биксурин һәр телдең үҙенә генә хас фольклор һәм яҙма әҙәбиәт өлгөләренә мөрәжәғәт итә, китапта бер юлы ике һүҙлексә урынлаштыра. Һүҙлексәлә, башҡа телдәрҙең лөғәт өлгөләре менән бергә, башҡортса 53 һүҙ килтерелә, улар ғәрәп, фарсы һүҙҙәре менән сағыштырыла. Ҡулланмала һорауҙар һәм яуаптар рәүешендә русса, фарсыса һәм төркисә текстар тәҡдим ителә. Китапта саф башҡорт телендә "Батыр батшаның әкиәте" тигән халыҡ хикәйәтенең баҫылыуы ҙур әһәмиәт ҡазана. Иҫке ғәрәп имлаһе менән яҙылған был хикәйәткә, профессор Ж. Ғ. Кейекбаев билдәләгәнсә, тел ғилеме күҙлегенән ҡарағанда "ниндәйҙер дәрәжәлә бөтөн башҡорт һөйләштәренең элементтары индерелгән".

М. Биксурин "Ҡазан университетының ғилми яҙмалары"нда "Өс туған" тигән башҡорт әкиәтен баҫтырып сығара. "Ике әҫәрҙең дә теле беҙҙең быуаттың 20-се йылдарында ғәрәпсә шрифт менән башҡортса яҙылған текстарҙан стиль яғынан да, лексик һәм грамматик йәһәттән дә әллә ни айырылмай. Был күренеш ниндәйҙер дәрәжәлә М. Биксуринды башҡорттоң яңы (милли) яҙмаһын башлап ебәреүселәрҙең береһе тип ҡарарға хоҡуҡ бирә. М. Биксуриндың "Башланғыс ҡулланма"һын академик А. Н. Кононов тәү башлап "башҡорт грамматикаһын билдәле дәрәжәлә системалы тасуирлаусы" хеҙмәт булараҡ баһаланы.

1870 йылда М. Биксурин мөхәррирлегендә башҡорт һәм татар йырҙары йыйынтығы донъя күрә. Бында башҡорт йырҙары ғәрәп графикаһы менән төп нөсхәһендә һәм руссаға тәржемәлә баҫып сығарыла.

Был хеҙмәттәре һәм күп йыллыҡ эшмәкәрлеге М. Биксуринды талантлы ғалим-педагог, лингвист, фольклорсы булараҡ күҙ алдына баҫтыра. Үҙ халҡының ауыҙ-тел ижады өлгөләрен йыйыу эше менән ул йәш сағынан, 1840 йылдарҙа уҡ, ҡыҙыҡһына һәм башҡорттар араһынан тәүгеләрҙән булып башлап ебәрә. Башҡорт иленең төрлө төбәктәренән ул йырҙар, әкиәттәр, хикәйәттәр, легендалар яҙып ала. Уның тарафынан яҙып алынған фольклор материалдарының бер өлөшө ҡульяҙма хәлендә хәҙерге Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге китапханаһында һаҡлана. М. Биксуриндың фольклорсылыҡ эшмәкәрлеге махсус өйрәнеүҙе, ул йыйған материалдар һәм, ғөмүмән, уның күп яҡлы ғилми мираҫы айырым том итеп туплап, баҫып сығарыуҙы көтә.

М. М. Биксурин, 84 йәшкә етеп, 1903 йылда тыуған ҡалаһы Ырымбурҙа донъя ҡуя. Уның исеме башҡорт фәне һәм мәҙәниәте тарихында ғәйәт ҙур һәм маҡтаулы урында тора.

**Рәшит ШӘКҮР.**

**"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан ҡыҫҡартып алынды.**

✓ 2009 йылда институт хеҙмәткәрҙәре Бөрйән районына ойошторолған экспедициянан "Аҡбуҙат"тың тағы бер беҙгә билдәле булмаған вариантын табып алып ҡайтты. Хәҙер уларҙы ла фәнни күҙлектән сығып тикшерергә кәрәк.

**Күптән түгел Сибай ҡалаһында "Урал батыр" һәм донъя халыҡтарының рухи мираҫы" тип аталған фәнни-ғәмәли конференция үтте. Ул быуаттарҙан-быуаттарға телдән-телгә күсеп килеп, һуңынан Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан ҡағыҙға теркәлгән бөйөк халыҡ ижады өлгөһөн ЮНЕСКО-ның Кешелектең телдән һөйләнгән матди булмаған мираҫы ҡомартҡылары исемлегенә индерергә тәҡдим итеү буйынса тағы бер аҙым булды.**
**Конференцияла күтәрелгән төп мәсьәләләр һәм киләсәккә ошо йүнәлештәге эш пландары менән БР Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА һәм фольклорсы, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры, филология фәндәре докторы Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ уртаҡлаша.**

# БЕҘ БӘХЕТЛЕ ХАЛЫҠ...

## "Урал батыр"ыбыҙ, ер кендеге Уралыбыҙ бар!



**▸ Эпос-ҡобайырыбыҙ ЮНЕСКО-ның Кешелектең телдән һөйләнгән матди булмаған мираҫы ҡомартҡылары исемлегенә инһен өсөн беҙгә нимәләр эшләргә кәрәк? Был йәһәттән конференцияның аныҡ ғәмәлдәрҙе тормошҡа ашырыу буйынса әһәмиәте ниҙә?**

**Ф. Хисамитдинова:** ЮНЕСКО-ның Кешелектең телдән һөйләнгән матди булмаған мираҫы ҡомартҡылары исемлегенә "Урал батыр"ҙың үҙен генә түгел, ә "Аҡбуҙат", "Заятүләк менән Һыуһылыу", "Ҡуңыр буға", Алпамыша менән Барсынһылыу", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу", "Күсәк бей" кеүек тотош ҡобайырҙар циклын тәҡдим итәбеҙ. Ни өсөн тигәндә, ЮНЕСКО-ның Матди булмаған ҡомартҡыларҙы һаҡлау тураһындағы конвенцияһына ярашлы, халыҡ ижады ҡомартҡыларының варианттары булырға тейеш. Шуға ла "Урал батыр"ҙың үҙен генә түгел, ә ҡобайырҙар циклын тәҡдим итеү урынлы буласаҡ. "Заятүләк менән Һыуһылыу"ҙы 1848 йылда Даль яҙып алып, журналда сығарған. 1812 йылда Ҡаҙанда Тимофей Беляев икенсе бер ҡобайырыбыҙҙы баҫтырып сығара. Йәғни, бының менән беҙ халыҡ ижады өлгөләренең теркәлеү осорон боронғолаштырабыҙ. Икенсенән, уларҙың бөтөнөһөнөң дә яҙып алынған варианттары бар. 2009 йылда, мәҫәлән, институт хеҙмәткәрҙәре Бөрйән районына ойошторолған экспедициянан "Аҡбуҙат"тың тағы бер беҙгә билдәле булмаған вариантын табып алып ҡайтты.

Әлегәсә беҙ тик "Урал батыр" эпос-ҡобайыры өҫтөндә генә эшләнек, уны өс телгә тәржемә иттек, башҡа телдәргә тәржемә итеүселәр бар. Хәҙер башҡа ҡобайырҙар циклын пропагандаларға, популярлаштырырға, уларҙы ла фәнни күҙлектән сығып тикшерергә кәрәк. Донъя халыҡтарының ҡайһы берҙәре ЮНЕСКО-ның Кешелектең телдән һөйләнгән матди булмаған мираҫы ҡомартҡылары исемлегенә үҙҙәренең бер нисә халыҡ ижады өлгөһөн индергән. Беҙ был йүнәлештә дөрөҫ эш алып бармағанбыҙ, дөрөҫөн әйткәндә, бөтөнләй эшләмәгәнбеҙ. Хатта бөйөк ҡобайырҙарыбыҙҙы Рәсәйҙең матди булмаған мәҙәни мираҫы исемлегенә лә индермәгәнбеҙ. Хәҙер беҙгә, төрки халыҡ булараҡ, "Урал батыр"ҙы төрки донъяһының матди булмаған мәҙәни мираҫы исемлегенә лә индерергә, төрөктәрҙең уны беҙгә ярҙам итеп, ЮНЕСКО-ға тәҡдим итеүенә лә өлгәшергә кәрәк.

**▸ Конференция барышында алты секция эшләне. Уларҙың бүленеше ниндәй принциптан сығып башҡарылды? Ғөмүмән, ул секцияларҙа ҡатнашыусылар, тыңлаусылар кемдәр?**

**Ф. Хисамитдинова:** Секцияларҙың береһендә "Урал батыр" башҡорт халҡының ҡиммәтле эпик әҫәре булараҡ тикшерелде, икенсеһендә инде донъя халыҡтарының эпостары менән сағыштырылды. Өсөнсөһөндә фольклор теле, этнолингвистика, лингвофольклористика күҙлегенән сығыштар тыңланды. Әлегәсә беҙҙә фольклор теле буйынса тикшереүҙәр булманы. Ә был тема артында ниндәй асыштар йәшеренгәне өйрәнелмәгәйне, хәҙер шул йүнәлештә эшләй башланыҡ. Бер секцияла мәҙәниәттәр диалогы һәм мәҙәни-ара аралашыу теорияһы буйынса фекер алышынды. Фольклор һәм әҙәбиәт, шулай уҡ методика ла ситтә ҡалманы. Минә Мәскәүҙән килгән ҡайһы бер ғалимдар: "Ә ни эшләп һеҙ конференцияғыҙҙы фәнни-ғәмәли тип атанығыҙ, нинә фәнни генә түгел?" - тигән һорау бирҙе. Шунан мин: "Беҙ тел, фольклор буйынса конференцияларыбыҙҙы мотлаҡ фәнни-ғәмәли тип атайбыҙ, ни өсөн тигәндә, шул уҡ "Урал батыр"ҙы, башҡа эпостарыбыҙҙы мәктәптә лә өйрәнәләр. Конференцияла уҡытыусылар уҡытыу методикаһы үҙенсәлектәре тураһында бер-береһе менән фекер алыша. Был сарабыҙ уҡытыуҙы, өйрәнеүҙе яҡшыртырға, яңы, йәш быуындарға таратырға мөмкинлек бирә", - тигәс, улар: "Бик дөрөҫ эшләйһегеҙ. Быны һеҙҙән өйрәнергә кәрәк", - тип әйтте. Эйе, беҙ конференцияға телселәрҙе генә түгел, башҡаларҙы, уҡытыусыларҙы ла саҡырҙыҡ. Улар ҙа беҙҙең тикшеренеүҙәр, эҙләнеүҙәр тураһында хәбәрҙар булһын. Ә инде аныҡ секцияла - тәжрибә уртаҡлашһын. Уҡытыусы эҙләнеүсе булырға тейеш.

**▸ Ни өсөн сарала "Урал батыр"ҙы башҡорт милли фәлсәфәһенә бәйләп ҡараған сығыштар булманы тиерлек? Һуңғараҡ осорҙа тыуған ҡаҙаҡ, яҡут, герман эпостары менән йәнәш ҡарау уның бәҫен төшөрмәйме?**

**Ф. Хисамитдинова:** Әлегәсә беҙ "Урал батыр"ҙы башҡа әҫәрҙәр менән бәйле, тип, тик үҙебеҙ, башҡорт ғалимдары, телселәре, фольклорсылары ғына яҙҙыҡ. Был конференцияның яңылығы шунда булды: ситтән килгән ғалимдар "Урал батыр"ҙы, башҡа әҫәрҙәребеҙҙе башҡа халыҡтарҙың эпостары менән параллель үткәреп сағыштырҙы. Мәскәү ғалимдары, мәҫәлән, рус халыҡ әкиәттәрендәге мөғжизәле ат Сивка-бурка менән Аҡбуҙатты сағыштырҙы. Шул уҡ ҡырғыҙҙарҙың әҫәрен алһаҡ, унда һәр бер осорҙоң яңылыҡтары сағылыш тапҡан. Сағыштырыуҙар аша әҫәрҙең ҡайһы ваҡытта ингәнен, осорон билдәләргә була. Башҡа ситтән килгән ҡунаҡтар ҙа үҙҙәренең эпостары менән пареллель үткәрҙе. Был сағыштырыуҙар беҙҙең өсөн бик мөһим, улар халыҡ ижады өлгөләрен, "Урал батыр"ыбыҙҙы, уға ҡараған циклдағы ҡобайырҙарыбыҙҙы донъя кимәленә сығарырға ярҙам итәсәк.

Икенсенән, шул уҡ "Урал батыр" - бик боронғо халыҡ ижады. Беҙгә уның боронғолоғон раҫлаған фекерҙәр кәрәк. Бындай фекерҙәр тел буйынса ла, фольклор буйынса ла яҙылған докладтарҙа яңғыраны. Ул фекерҙәр эпос-ҡобайырыбыҙҙың ижад ителеү дәүере буйынса төрлө уйҙырмаларға нөктә ҡуйҙы, тип уйлайым. Магнитогорск ҡалаһынан Г. Уйылданова үҙенең сығышында "Урал батыр" ҡобайырының өс - шумер-аккард, һинд-иран, төрки мәҙәни-тарихи пластан тороуын раҫлай. Ә төрки һәм иран халыҡтары араһындағы әҙәби, фольклор һәм башҡа бәйләнештәр, яҡынса иҫәпләгәндә лә, ике мең йылдан ашыу дауам итә. Тарихсылар һәм телселәр фекеренсә, был ҡобайыр-эпос оҙаҡ ваҡыттар буйына бер нисә сәсән тарафынан ижад ителгән. Быуаттар һуҙымында ул телдән-телгә тапшырылып, урындағы үҙенсәлектәрҙе үҙ эсенә алған, сәсәндең кисерештәре аша үткән. Шулай ҙа унда донъя ҡоролошо, аҡыл һәм яҡшылыҡ эталоны урынлы ҡуйылған. "Урал батыр" менән "Аҡбуҙат" ҡобайырҙарының мифологик образдарын Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр менән сағыштырып өйрәнеү һөҙөмтәһендә археолог В. Котов Шүлгәнташтың боронғо башҡорт ата-бабаларының йолалар башҡара торған үҙәге булыуын фаразлап, уны таш быуат дәүере менән бәйләне.

"Урал батыр" ҡобайырының төп фәлсәфәүи асылы - кешенең был ерҙәге тәғәйенләнеше, йәшәү һәм үлемдең мәғәнәһе, тәбиғәттең, кешелектең мәңгелек икәнлеген раҫлау. Әммә тап ошо фәлсәфәгә генә арналған айырым сығыштар булманы,

*Әлегәсә беҙ "Урал батыр"ҙы башҡа әҫәрҙәр менән бәйле, тип, тик үҙебеҙ, башҡорт ғалимдары, телселәре, фольклорсылары ғына яҙҙыҡ. Был конференцияның яңылығы шунда булды: ситтән килгән ғалимдар "Урал батыр"ҙы, башҡа әҫәрҙәребеҙҙе башҡа халыҡтарҙың эпостары менән параллель үткәреп сағыштырҙы. Мәскәү ғалимдары, мәҫәлән, рус халыҡ әкиәттәрендәге мөғжизәле ат Сивка-бурка менән Аҡбуҙатты сағыштырҙы. Шул уҡ ҡырғыҙҙарҙың әҫәрен алһаҡ, унда һәр бер осорҙоң яңылыҡтары сағылыш тапҡан. Сағыштырыуҙар аша әҫәрҙең ҡайһы ваҡытта ингәнен, осорон билдәләргә була. Башҡа ситтән килгән ҡунаҡтар ҙа үҙҙәренең эпостары менән пареллель үткәрҙе. Был сағыштырыуҙар беҙҙең өсөн бик мөһим, улар халыҡ ижады өлгөләрен, "Урал батыр"ыбыҙҙы, уға ҡараған циклдағы ҡобайырҙарыбыҙҙы донъя кимәленә сығарырға ярҙам итәсәк.*

*✓ Бөгөнгө көндә лә иң актуаль проблема - ер. Ә башҡорт өсөн уның һәр киҫәге - Ватандың киҫәге. Шуның өсөн ҡан түккәндәр, шуның өсөн образлы итеп ағасын ҡырҡҡан саҡта тамып ҡала батырҙар ҡандары, тип әйткәндәр.*

дөйөм алғанда, был ниндәйҙер тема эсендә төҫмөрләнә башланы башлауға, ләкин әлегә ул бик һиҙелерлек түгел. Ғөмүмән, конференцияла күберәк йәшерәк быуын ҡатнашты, йәштәр әле әҫәрҙең төбөнә төшөп етә лә алмай бит.

**► Күп кенә ғалимдар, журналистар эпосыбыҙҙы милләтебеҙ үҫеше, киләсәге өсөн милли идея булырлыҡ ҡомартҡы тип нарыҡлай. Шул уҡ ваҡытта уны әкиәт, уйҙырма тип таныусылар ҙа бар. Эпостың халҡыбыҙ, кешелек өсөн милли идея булырлыҡ ҡиммәте нимәгә ҡайтып ҡала, тип уйлайһығыҙ?**

**Ә. Сөләймәнов:** "Урал батыр"ҙы әкиәт томына индерелгән өсөн генә әкиәт тип нарыҡлап булмай. Эйе, күренекле ғалим Әхнәф Харисов эпосты әкиәт томына индергән, тик был ул замандағы сәйәсәткә яраҡлашыу ниәтенән эшләнгән. 1945 йылдың февралендә КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитетына милли сәйәсәт буйынса Үҙәктән ныҡ ҡына эләгә. Шуға күрә Әхнәф Харисов эпостарҙың барыһын да әкиәт томына индерергә мәжбүр булған.

Милли идеяға килгәндә, был төрлө яҡлы һорау. Бында, тәү сиратта, милли-этник фекерләү үҙенсәлеген табырға кәрәк. Һәр бер этностың үҙенең фекерләү тибы бар. Мәҫәлән, 19-сы быуаттың 60-сы йылдарында Владимир Даль Башҡортостандың бер өлөшөн йөрөп сыҡҡандан һуң, башҡорттоң йыры ике өлөштән тора, тәүгеһе кинәйәләп әйтеүгә ҡоролған, өсөнсө-дүртенсе юлдары төп йөкмәткене тотоп тора, ти. Был башҡорттоң фекерләү тибына ла ҡағыла. Шуға күрә, "Урал батыр"ҙа кинәйәләп күтәрелгән милли идея - ергә ереккәнлек, ер ҡәҙерен белеү тойғоһо, тием мин. "Урал батыр" эпос-ҡобайырында ерҙе һаҡлау мотлаҡ бурыс булып тора. Урал шарттар ғына тыуҙыра, ә һаҡлау бурысы - беҙҙеке. Йәғни Урал батыр Йәншишмәнең һыуын бар тереклек йәшәр шарт тыуҙырыуға файҙаланырға кәрәк икәненә төшөнә. Шул шарт үҙе ғәмәлгә ашһын өсөн, йәғни, бар тереклек быуын-быуын яңыра-яңыра йәшәһен өсөн тәүшарттың үҙен булдырыу фарыз. Донъя диңгеҙенән Урал батырҙың ҡоро ер хасил итеүе - шул тәүшартты булдырыуға өлгәшеү ул. Әгәр ҙә эпостар циклын алһаҡ, унда Урал батыр барлыҡҡа килтергән шарттар артабан дауам итә һәм уларҙы Салауат Юлаев осоронаса бер епкә теҙһәк, барыһында ла ерҙе һаҡлау мәсьәләһе ҡыҙыл еп булып үтә.

Бөгөнгө көндә лә иң актуаль проблема - ер. Кемгәлер ул картуф сәсеп, ҡортон сүпләй-сүпләй үҫтереү участкаһы, кемгәлер бер ҡыш сығырлыҡ йәшелсә-емеш туплау сығанағы, кемгәлер аунап ятып ял итеү урыны. Ә башҡорт өсөн уның һәр киҫәге - Ватандың киҫәге. Шуның өсөн ҡан түккәндәр, шуның өсөн образлы итеп ағасын ҡырҡҡан саҡта тамып ҡала батырҙар ҡандары, тип әйткәндәр. Тән, йән тетрәткес образлылыҡ.

**Ф. Хисамитдинова:** Телевизорҙан сығыш яһап, Рәсәй Фәндәр академияһының Этнология һәм антропология институты директоры, академик Валерий Тишков, әйтәйек, ниндәйҙер чечен йәки башҡорт Мәскәүҙә фатир һатып ала икән, ул шунда уҡ шул ергә хоҡуҡ һатып ала, тигән фекер әйтте. Тишков һымаҡтар фекеренсә, кемдер Нью-Йорктан килеп, Башҡортостанда фатир һатып алһа, тимәк, ул ошондағы ергә хоҡуҡ та һатып ала була. Хәҙерге идея шундай. Әгәр закон сығарыусылар был ерҙе беҙҙең аҫаба еребеҙ тип закон ҡабул итмәй икән, ысынлап та, Ватаныбыҙ ситтәр ҡулына күсергә лә мөмкин...

**► Әле Туймазы районының Ҡандраҡүл буйында мәктәп уҡыусылары араһында "Урал батыр" эпос-ҡобайырын яттан һөйләү буйынса конкурс булып үтте. Уның әһәмиәте, һеҙҙеңсә, нимәлә?**

**Ф. Хисамитдинова:** Башҡортостан Мәғариф министрлығы тарафынан мәктәп уҡыусылары араһында "Урал батыр"ҙы яттан һөйләү буйынса конкурстың беренсе этабы - ятлау этабы. Ул, исмаһам, эпос-ҡобайырҙы пропагандалау өсөн булһа ла кәрәк. Шул сәбәпле балаларҙың күпмеһелер уны яҡшылап уҡый, ятлай, белә, белем туплай. Икенсе этапты мин ошо алған белеме нигеҙендә беҙҙең ҡобайырҙарыбыҙ буйынса үҙенең вариантын ижад итеү тип күҙаллайым. Башта уҡ әйтеп үтеүемсә, әгәр беҙ эпостарҙың, ҡобайырҙарҙың ысынлап та халыҡ ижады икәнлеген күрһәтергә теләһәк, уның варианттарын табырға кәрәк. Ятлаусылар бер кимәл булһа, хәҙер улар араһынан ҡобайырҙарҙың варианттарын ижад итерлек ысын сәсәндәрҙе үҫтереү зарур. Улар беҙҙең эпос-ҡобайырҙарыбыҙҙы белә, базаһы бар, кемдәндер нимәлер ишеткән һәм шуның нигеҙендә ысын вариант тыуҙырырға ла тейеш.

**Ә. Сөләймәнов:** Яҡутстанда уҡыусылар үҙҙәре яҙған, хатта ғаиләләре менән ижад иткән олонхоны һөйләй. Ошо маҡсатта конкурстар үткәрелә. Мин йыл да уҡыусыларға эпостың ҡайһы бер үҙенсәлектәре тураһында аңлатам һәм: "Урал батыр" ҡобайыры кешелектең бала сағында ижад ителгән, һеҙҙең дә хәҙер бала сағығыҙ, эпостағы ҡайһы бер ваҡиғаларҙы үҙегеҙсә нисек дауам итер инегеҙ? " - тип мөрәжәғәт итәм. Улар хәҙер "Урал батыр"ға үҙҙәре ижад иткән куплеттарҙы ла өҫтәп һөйләй башланы. Мин уларҙың ижад иткәндәрен киләсәктә айырым тупланма итеп сығарыу өсөн йыйып барам. Әҫәрҙе ятлатып ҡына, шуны һөйләтеү менән сикләнеү - баланың хыял ҡанатын киҫеү, ер ҡуйынынан бәреп сыҡҡан шишмәне хәтерләткән фантазияһын баҫырыу, тимәк, уны ижад иткән системанан ситләтеү менән бер.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**1979 йылда студенттар менән осрашыуға килгәнендә венгр ғалимы Йозеф Торма: "Һеҙ, башҡорттар, бәхетле халыҡ, сөнки һеҙҙең милли эпосығыҙ бар. Милли эпос ошо ергә ереккән, борондан тамырланған халыҡта ғына булыуы мөмкин. Бына беҙ тегендә-бында күсеп йөрөү арҡаһында эпостарыбыҙҙы юғалтып бөткәнбеҙ. Ниндәйҙер бер мотив ҡына ҡалған. Күкте терәп ниндәйҙер мөһабәт имән үҫеп ултырыуы тураһында бер мотив. Бүтән нәмә юҡ", - тине. Юҡҡа ғына ситтән яҡшыраҡ күренә, баһалана, тимәйҙәрҙер. Ысынлап та, булғандың ҡәҙерен белергә, бәҫен арттырырға өйрәнәйек. Бөйөк ҡобайырыбыҙҙа ҡыҙыл еп булып һуҙылған ватансылыҡ, ергә ереккәнлек идеяһын ғына түгел, еребеҙҙең үҙен һаҡлайыҡ һәм киләсәк быуындарға тапшырайыҡ. Бәхет өлөшләтә генә булмай, ул һәр саҡ тулы була, тулы бәхетле булыр өсөн беҙҙең "Урал батыр"ыбыҙ ҙа, венгр ҡәрҙәштәребеҙ әйтеүенсә, ер кендеге булған Урал тауыбыҙ ҙа бар.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ҠОБАЙЫР ҺӘМ ШҮЛГӘНТАШ МӘМЕРЙӘҺЕ



**..."Урал батыр" эпосында иң ғәжәпләндергәне шул: унда башҡарылған бар архаик йолаларҙың аныҡ географик һәм тарихи объекты бар: ул Көньяҡ Уралдағы Шүлгәнташ мәмерйәһе. Шулай уҡ башҡорт фольклорының бик күп героик иртәк-хикәйәттәренең, риүәйәттәр һәм легендаларының Шүлгән күленә йәки мәмерйәһенә сюжет бәйләнеше бар. Һәм барлыҡ был әҫәрҙәр "Урал батыр" мифологик эпосының иң боронғо һәм тулы редакцияһындағы төп вариантҡа барып тоташа. Эпостың нигеҙендә Тереһыу һәм Шүлгән күле мәғәнә эпиүҙәге булып тороуынан сығып, беҙ Шүлгән күле/мәмерйәһен башҡорттарҙың ата-бабалары өсөн таш быуаттан алып бағышлау һәм Тәбиғәттең яңырыу ғөрөф-ғәҙәттәре үтәлгән культ үҙәге тип раҫлай алабыҙ. Тап шул дәүер өсөн, һунарсыларҙың рухи мәҙәниәтенең бер өлөшө булараҡ, бағышлау йолалары хас. "Урал батыр" эпосының мифологик нигеҙенә һалынған боронғо таш быуатҡа хас архаика эҙҙәре был эпик әҫәрҙең палеолит йәшенә ҡарауын дәлилләй. Беҙҙеңсә, Шүлгәнташ мәмерйәһендәге юғары палеолит дәүерендәге ер аҫты ғибәҙәтханаһының структураһы менән мифтың төп ваҡиғаларында оҡшашлыҡтар бар. Юҡҡа ғына мәмерйә ер аҫты/һыу аҫты донъяһы хужаһы Шүлгәндең - Көньяҡ Уралдың ике боронғо эпосының төп геройҙарының береһенең исемен йөрөтмәй.**

Бөрйән районындағы Шүлгәнташ - Башҡортостандың ҙур мәмерйәләренең береһе. Был мәмерйә борондан теге донъяның кәүҙәләнеше булыуҙың идеаль сағылышы тип ҡабул ителеп, айырым ҡараш тыуҙырылыуҙың сәбәбе булып тора, тип иҫәпләй В. Е. Щелинский. Быны башҡорттарҙың күп һанлы риүәйәттәре һәм эпостары ла раҫлай. Уның тураһында беренсе мәғлүмәттәр XVIII быуаттың беренсе яртыһында ҡалдырыла, һуңынан уны академик экспедицияларҙа ҡатнашыусы П.И. Рычков (1760), И. Лепехин (1772) яҙып ҡалдыра. Мәмерйә тормошонда яңы этап 1959 йылда Көньяҡ Урал ҡурсыулығы зоологы А. В. Рюмин тарафынан ҡаялағы һүрәттәр табылыуға бәйле. Төрлө ғалимдар тарафынан 50 йыл тикшерелгәндән һуң барлығы охра һәм ҡара пигмент менән төшөрөлгән 200 һүрәт табыла.

...Шуны айырым билдәләргә кәрәк: Евразияла Шүлгән мәмерйәһе һәм күле кеүек күп риүәйәттәр, легендалар, эпостар, ышаныуҙар менән бәйле башҡа бер генә мәмерйә лә юҡ. Ғәмәлдә, күл һәм мәмерйә Көньяҡ Уралдың боронғо халҡының - башҡорттарҙың ата-бабаларының мифологик картинаһының үҙәге булып тора. Башҡорттар традицияһында геройҙың һыу аҫты донъяһы хужаһы менән алышы һәм Шүлгән күле төбөнән аттар өйөрө, эре мал көтөүе сығыуы юҡҡа түгел. Был сюжет мифологик эстәлекле "Аҡбуҙат" эпосы менән бәйле ҡаралырға тейешле "Заятүләк менән Һыуһылыу", "Ҡара юрға", "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡуңыр буға" кеүек ҡобайырҙарҙың нигеҙен тәшкил итә. "Аҡбуҙат" ҡобайырында геройға хайуандарҙы ҡанатлы ат Аҡбуҙат алып сыға һәм уның сығыуы тәбиғәт катаклизмы менән оҙатыла. Йәш батыр мотлаҡ үтәлергә тейешле артҡа боролоп ҡарарға ярамай тигән тыйыуҙы боҙа һәм һыуҙан ярға сығып өлгөрмәгән хайуандарҙың бер өлөшө кире күлгә сума. Йыһан атының ярҙамы геройҙы баштан-аяҡ үҙгәртә, һөҙөмтәлә, ул аҫҡы донъя ғифриттәрен еңеү мөмкинлеге ала ("Аҡбуҙат", "Урал батыр"). Былар барыһы ла эпостарҙың Шүлгәнташ мәмерйәһендә боҙлоҡ эпохаһының сағыу композицияларында сағылыш тапҡан боронғо миф нигеҙендә ижад ителгәнлеген раҫлауы мөмкин. Көньяҡ Урал мәмерйәһенең тағы бер үҙенсәлеге тап шунда ла инде.

Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: был мифологияның элементтары башҡорттарҙың донъяны күҙаллауында, фольклорында, ғөрөф-ғәҙәттәрендә һаҡлана. Мәҫәлән, әлегәсә Шүлгәнташ мәмерйәһен һәм Шүлгән күлен һыу аҫты (ер аҫты) донъяһының хужаһы һәм Аҡбуҙат кеүек ҡанатлы аттар йәшәгән урын тип ихтирам итеү һаҡлана. Бында ата-бабаларҙың рухы һәм дейеү-аждаһаларҙың шауҡымы ла йәшәй. Бөтөн башҡорт аттары байлыҡ килтереү энергияһы тип һанала, тимәк, барлыҡ байлыҡ "Шүлгән" тоҡомонан таралған аттарҙа. Башҡорттар йәшәгән барлыҡ территорияларҙа ла күлдәрҙә, шишмәләрҙә, ҡойоларҙа аждаһалар һәм ҡанатлы аттар йәшәүенә ышаналар. Уларға ландшафт элементтарының барлыҡҡа килеүе лә бәйле. Фольклорҙа һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙә кешенең һыу сығанағы хужаһына ҡорбан килтереүе лә һаҡланған. Әлегә тиклем ырыу тауҙарын һәм мәмерйәләр культын ихтирам итеү йәшәй.

Был әле үрҙә һүҙ алып барылған архаик эпостарҙа үҙ сағылышын тапҡан боронғо хтоник мифология башҡорттоң ата-бабаларында донъяға мифологик ҡараш формалаштырған. Ә ул ул ҡараштарҙың үҙәген Шүлгәнташ менән бәйле мифтар тәшкил итә. Был мәмерйәләге палеолит дәүере һүрәттәрен башҡорт мифологияһы менән сағыштырып тикшереү башҡорт мифологияһының боронғолоғон раҫлай. Ошоларҙы иҫәпкә алып, палеолит ахырынан алып бөгөнгәсә Көньяҡ Урал киңлектәрендә йәшәгән халыҡтар араһында өҙлөкһөҙ күсәгилешлек бәйләнеше бер ҡасан да өҙөлмәгән һәм хәҙерге башҡорттар уларҙың вариҫы, тип әйтергә була. Бынан сығып, таулы башҡорттарҙың һәм, ғөмүмән, Урал-Алтай халыҡтарының этногенезын яңынан ҡарап сығыу мәсьәләһе ҡуйыла фән алдына.

**Вячеслав КОТОВ,**
**Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты археология бүлегенең өлкән ғилми хеҙмәткәре.**

*КИТАБЕННАС*

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

**236**

Яңылыш эшләһәң насарлыҡ,
Ҡыла ҡалһаң һин яҡшы бер ҡылыҡ.
Һыҙылып ташланыр яманлыҡ,
Күңеленә нур бөркөр яҡшылыҡ.

**237**

Алланы асыуландырып,
Ҡыуандырһаң батшаны,
Юлдан яҙыр баштарың.

Батшаларҙың тупһаһында
Кемдәр тапана -
Күңеле аҙа шуларҙың,
Намыҫы таплана.

Байҙарға һирәк керегеҙ,
Аллаһ һеҙгә ниғмәт биргән,
Шуның ҡәҙерен белегеҙ.

**238**

Ризыҡтың яманы -
Алыу етемдәр малын.

**239**

Тоғролоҡ
Мал - ризыҡ өҫтәр,
Хыянат
Фәҡирлек көҫәр.

**240**

Муллыҡта йәшәгәнеңдә
Һин Аллаһҡа табын.
Һин тарлыҡҡа ҡалғанында
Аллаһ үҙе таныр.

**241**

Яҡшылыҡ иҫкермәй,
Гонаһ онотолмай.
Аллаһ тыумай-үлмәй,
Ныҡ иман онотолмай.

**242**

Кемдәр донъялағы өсөн
Әхирәттән ваз кисмәгән,
Кемдәр әхирәте өсөн
Донъялыҡтан ваз кисмәгән,
Кемдәр ил-халыҡ өҫтөнә
Бәлә, йөк булып төшмәгән,
Бына шулар арағыҙҙа
Иң хәйерле, саф кешеләр.

**243**

Етеш тормоштарҙа үҫеп,
Татлы ризыҡтар йәйеп тә,
Яҡшы аттарға атланып,
Затлы кейемдәр кейеп тә,
Маһайыуҙан уҙмаһалар,
Маҡтанһалар көн дә, төн дә,
Был кешеләр иң насары,
Иң яманы өммәтемдә.

**244**

Әҙәм балаһының тирәһендә
Туҡһан туғыҙ үлем әйләнә.
Әгәр шулар хаталана икән,
Оҙон ҡартлыҡ насип бәндәгә.

**245**

Кем ярата кешеләрҙең зарығып
Ҡаршыһында баҫып тороуын,
Кеше намыҫын йыртҡан ул түрәнең
Тик тамуҡта булыр урыны.

Йә етәксе икән, йә хөкөмдар -
Унан ярҙам өмөт иткәндәрҙең,
Көнө уға ҡалған мохтаждарҙың,
Меҫкенлектә яфа сиккәндәрҙең
Ярҙам һорап килгән юлын ҡыйһа,
Ишеген шартлатып ябып ҡуйһа,
Аллаһы Тәғәлә шул түрәнең
Онотормо нахаҡ эштәрен?
Унын мохтажлығы ҡаршыһында
Ябып ҡуйыр күк ишектәрен.

Илде башлыҡ түбән ҡуйһа үҙенән,
Ғәҙел булмаһа эш менән, һүҙ менән,
Аллаһ уны утҡа ташлар йөҙтүбән.

**(Дауамы бар).**

*КОНКУРС*

**Донъяға тыуған көндән алып, кеше ғүмерендә мәңгелеккә иҫтә ҡалырлыҡ миҙгелдәр бар. Шуларҙың иң-иң ҡыуаныслыһы, моғайын да, туй мәжлеселер. Ошондай күркәм сараны - Гүзәл һәм Артур Шәнъйәзовтарҙың туй мәжлесен ошо көндәрҙә беҙгә Мәләүез ҡалаһының Туғайлы ҡасабаһында үткәрергә насип булды. Йәштәр бер-береһен күрше республикала, Ҡаҙан ҡалаһында, Ислам университетында уҡығанда табышҡан. Туй шуныһы менән үҙенсәлекле, зауыҡлы булды: ул хәмерһеҙ үтте. Табында иҫерткес эсемлектәр булмауы һис кенә лә кәйефте төшөрмәне, киреһенсә, ул уйын-көлкө, шаян һүҙ, аҡыллы кәңәштәр оҙатыуында йөкмәткеле үтте. Ҡоҙа-ҡоҙасаларҙың үҙ-ара иркен аралашыуы һәм шул уҡ ваҡытта ике төбәктең дә данлы ер-һыуы, лайыҡлы, ихтирамлы шәхестәре менән яҡындан таныштырыу барыһының да күңеленә ҡәнәғәтлек тойғоһо килтерҙе. Туйҙарҙы хәмерһеҙ үткәреүгә бер нимә лә етмәй икән, тигән һығымта яһаныҡ аҙаҡ. Ошо туйҙа файҙаланған сценарийҙы "Айыҡ туй" конкурсына тәҡдим итмәксе булдыҡ.**






# ҠОШ ҠАНАТЛЫ - ПАР МЕНӘН,

## Ир ҡанатлы - йәр менән

*Байрамса биҙәлгән яҡты залда тантанаға саҡырып, матур көйҙәр яңғырай. Никах йортонан килгән йәштәр яҡындарының, туғандарының, дуҫтарының дәррәү алҡыштары солғанышында түргә уҙа.*

**1-се алып барыусы:** Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле йәштәр! Һаумыһығыҙ, ата-әсәләр, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар! Изге сәғәттә, изге ниәттә табын түренә саҡырабыҙ! Һеҙҙе бөгөн ике йәш йөрәктең уй-хистәре, сәстәре сәскә бергә бәйләнгән никахлашҡан көндәре менән ихлас тәбрикләйбеҙ! Һеҙгә, йәштәр, Аллаһы Тәғәләнән бирелгән мөхәббәтте, нәфис хис-һөйөүҙе хөрмәт итеп, уға тап төшөрмәй йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ!

Йәшлек утрауында тыуҙы ғаилә,
Һоҡланып та һайрай ҡоштары.
Һөйөү гөлдәренән ысыҡ тама,
Һыҙылып ята бәхет юлдары.

Шул юлдарға фатихалар бирҙек,
Яман күҙҙәр бер үк теймәһен.
Берегеҙ уттар булһа, берегеҙ һыу һибегеҙ,
Ел-дауылдар иҫеп китмәһен.
Иман-шәфҡәт ташлап китмәһен.

*(Йәштәр өсөн музыкаль сәләм яңғырай).*

**2-се алып барыусы:** Шундай изге теләктәр ямғыры һибелгәндә, йыр-моңдар түгелгәндә, йәйғор нурҙарындай ихлас йөҙҙәр һөйөп баҡҡанда, ошо тантананы, туй мәжлесен асыҡ тип иғлан итәбеҙ. Изге фатиханы ата-әсәләрҙән алайыҡсы. Рәхим итегеҙ, Рәхимйән ағай һәм Таңсулпан апай Дәүләтбаевтар. Һеҙ бөгөнгө туй тантанаһын асыу өсөн ниндәй теләктәр еткерер инегеҙ? Һеҙҙең ризалыҡты һорайбыҙ.

**Ҡыҙҙың ата-әсәләре теләк әйтә.**

**2-се алып барыусы.** Кейәү егет Аҙаматтың ата-әсәләренә - Хәйрулла һәм Зөбәржәт Исмәғиловтарға һүҙ бирелә. Һеҙҙең тарафтарҙан рөхсәт бармы?

**Кейәүҙең ата-әсәләре сығышы.**

*Йыр, музыка.*

**1-се алып барыусы:** Хөрмәтле табын, хөрмәтле йәштәр! Изге фатиханан күңел тағы ла сафланып, туйҙарығыҙҙың ҡотло булыуын, туй байрамының йәмле булыуын, аш-һыуығыҙҙың тәмле булыуын теләйбеҙ. Пар аҡҡоштарҙың бәхеттәре ғүмерле, ғүмерҙәренең бәхетле булыуын теләп, уларҙың уй-хистәренең сафлығына ышанғыбыҙ килә.

**2-се алып барыусы:**

Ике йөрәк - бер бөтөн йәр, серләштеләр
Фатиханы ата-әсәнән алмаҡсылар.
Пар күгәрсен гөрләшкәнен кем теләмәй,
Улар ҙа бит изге уйҙа булмаҡсылар.
Йәш йөрәктәр яҡты юлға сәфәр тотто,
Бөгөн килеп бәхет туйы ниндәй ҡотло.
Никах йорто бәйләне лә пар яҙмышты,
Ғүмерлеккә айырылмаҫҡа ҡулын ҡыҫты.

*Музыка, йыр. Йәштәрҙе һөйөү вальсына саҡырырға мөмкин.*

**1-се алып барыусы:** Ике ҡайын бергә йәнәшә үҫә, йылғалар бергә ҡушылып аға, ә инде матур ике йәр бергә тап килһә, улар пар һандуғас кеүек һайраша. Һеҙгә ғүмер буйы һандуғастарҙай һайрашып, күгәрсендәрҙәй гөрләшеп, бер-берегеҙҙе ҡыуандырып, бер-берегеҙгә әҙ генә бәхет, әҙ генә мөхәббәт бүләк итеп, йылмайып йәшәргә булһын, хөрмәтле йәштәребеҙ. Ошо гүзәл иштәр бөгөн күпме туғандарға яңы туғанлыҡ хистәре ептәрен һуҙҙы, осраштырҙы һәм танышыу тигән изге йолаға юл асты.

Сәләм биреп, сәләм алыу менән
Сит менән дә туған булаһың.
Алыҫ араларҙы яҡынайта
Эй, халҡымдың матур йолаһы:
Һаумыһығыҙ!

Ниндәй матур сәләмләшеү һүҙҙәре. Әйҙәгеҙ беҙ ҙә шулай бергәләшеп, осрашҡанда сәләмләшеп, танышып, аралашып йәшәйек. Туй табыныбыҙҙы яңы тыуған ғаиләнең туған-тыумасаһы менән ике яҡтан да ата-әсәләр таныштыра һәм был сауаплы эште уларға тапшырабыҙ.

*Ата-әсәләр табындағыларҙы һәр береһе үҙ яғынан килгән туғандар менән таныштыра.*

**2-се алып барыусы**: Ҙур рәхмәт һеҙгә, ата-әсәләр. Ике яҡты берҙәй итеп, бер бөтөн табын туғандары иттегеҙ. Халҡыбыҙҙа "Ҡоҙа булғансы ныҡ һөйләш, унан ныҡ һыйлаш" тиҙәр. Хәҙер осрашҡанда бер-берегеҙҙе хөрмәт итеп, ғүмерлеккә туғанлашып йәшәргә яҙһын. Ошо иш күгәрсендәргә оло юлдарҙа, зәңгәр киңлектәрҙе иңләгәндә ҡанаттарына бөтмәҫ ҡеүәт, талмаҫ ҡанат ҡуйыусы ла һеҙ. Һеҙҙең үҙегеҙ ҡорған ояғыҙҙа мәрхәмәтле балалар үҫкән икән - тимәк, һеҙ бәхетле. Киләсәктә лә балаларығыҙҙан ауыр һүҙ ишетмәйенсә йәшәгеҙ. Яҡты сырайҙары тормошоғоҙҙо тағы ла нурландырһын, тыуасаҡ ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ күңелегеҙҙе байытһын.

**1-се алып барыусы:**

Һандуғастар һыу эсәләр,
Шишмәләргә теҙелеп
Көн дә һеҙ ҙә һағынығыҙ,
Бер-берегеҙҙе өҙөлөп, -

тигән теләк юллай һеҙгә ата-әсәләрегеҙ, сөнки улар һеҙгә гел генә изге фатихала йәшәй, тормошоғоҙға йәм өҫтәй, йән өрә. Һеҙгә ғүмер биргән ата-әсәләр бөгөн икеләтә шатлыҡ кисерә, сөнки ғаиләләрҙә килен алыу шатлығы, кейәү күреү һөйөнөсө өҫтәлде. Бөгөн ҡәйнә кеше килен алып, изге һүҙҙәрен килененә еткерә.

**Ҡәйнә нәсихәте:**

Килен булып төшкән сағыбыҙҙы
Онотмайыҡсы беҙ ҙә, ҡәйнәләр.
Килен-ҡәйнә һәр саҡ татыу булһын,
Тыныс йәшәһендәр ғаиләләр.
Йәш килендәр, һеҙ ҙә онотмағыҙ,
Алда әле ҡәйнә булаһы.
Кәңәшсе булайыҡ килендәргә,
Серҙәш булайыҡ килендәргә,
Килендәр ҙә кеше балаһы.

Ә хәҙер улым менән киленемде үҙемдең яныма саҡырам. Киленемә мамыҡ шәлем ябайым, улымды арҡаһынан һөйөп, үҙ ҡулдарым менән бәйләгән джемпер бүләк итәйем. Ҡулдарымдың йылыһы, һүҙҙәремдең наҙлыһы һәр саҡ һеҙҙе йылытып йәшәһен.

**2-се алып барыусы:** Башҡортостан Республикаһы күгендә осҡан пар күгәрсендәрҙе, яңы тыуған ғаиләбеҙҙе бөгөн бар ғәләм ҡотлай, тәбрик итә. Илаһи донъяның саф һауаһын һулап, тәмле ризыҡтарын татып, унын гүзәллеген күреп, дуҫтарығыҙ, туғандарығыҙ менән гөрләшеп йәшәүегеҙҙе теләп, иң яҡындарығыҙ һеҙҙе был ҡәҙерле көнөгөҙҙә, ҡорған ғаиләгеҙҙең мәнфәғәтен ҡеүәтләп, үҙҙәренең бүләктәрен дә тапшырмаҡсы.

Рәхмәт һеҙгә, саҡырҙығыҙ беҙҙе,
Был шатлыҡты ҡабул иттек беҙ.
Бәләкәстәр булһа, донъя йәмле,
Был сәләмде лә ҡабул итербеҙ,
Һәм шатланып килеп етербеҙ, -
тиҙәр һеҙгә иң яҡындарығыҙ.

Ҡотлау өсөн һүҙебеҙҙе оло һәм ҡарт әсәйҙәргә һәм атайҙарға бирәбеҙ.

**Олатай:** Тәртиптең әсәһе - тәрбиә, тиҙәр, балалар. Ғаилә - бәхет асҡысы, тибеҙ.Ошо бәхеткә юл асҡанда һеҙгә изге кәңәшем бар. Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла, тигәндәй, ололарҙың фатихаһынан айырылмаһағыҙ, тормошоғоҙ күркәм һәм тәртиптә булыр. Берегеҙ уйлағанда, икенсегеҙ ҡеүәтләһә, тормош та тигеҙ барыр, ғаилә арбаһының тәгәрмәстәре тигеҙ

һуҡмаҡтарҙан тәгәрәр. Беҙҙең һеҙгә булған бүләгебеҙ дүрт аяҡлы мал булыр.

**Оләсәй:** Өгөт-нәсихәтсе ҡәйнәң булһын,
Серҙәреңде унан йәшермә.
Ир туғаны оло таяныс ул,
Хөрмәтлә олоһон, йәшен дә.
Яҡты йөҙөгөҙҙө, йылы һүҙегеҙҙе
Ҡыҙғанмағыҙ ата-әсәнән.
Онотмағыҙ, улар һеҙҙе тапҡан,
Тормошҡа йәм, һеҙгә йән биргән.

Кәнәштәребеҙҙе күңелегеҙгә һалығыҙ, ата-әсәгеҙҙе хөрмәт итегеҙ һәм тиң күрегеҙ. Ир-атты мунса ташы иткән дә - ҡатын, йөҙөк ҡашы иткән дә -ҡатын, тиҙәр, килен. Улыбыҙҙы тәрбиәләп, хөрмәтләп йәшәһән, үҙең дә ошо хөрмәттән һөйөнөп йәшәрһең.

Минән һеҙгә ҡуш мендәрҙәр, йоҡлағанда тәмле төштәр күреп, иртән уянғанда яҡшы кәйеф, дәрт менән уянырға насип итһен.

*Ҡотлауҙар дауам итә. Ата-әсәләр, яҡын туғандар, дуҫтар һүҙ ала. Шунан һыйлашыу йолаһы атҡарыла.*

**1-се алып барыусы:** Ҡоҙа булғансы, нығ һөйләш, унан нығ һыйлаш, тиҙәр. Хәҙер мин ике яҡтың да ҡоҙаларын һый өҫтәле янына саҡырам. Ҡоҙалар нисек һыйлаша ала икәнен күрәйек. Бына тәрилкәлә ҡаҙылыҡтар, ҡабымлыҡтар ята. Төп ҡоҙалар ҡаҙылыҡ һоғондороп, ҡоҙағыйҙар үҙ ҡоҙаларына ҡымыҙ ҙа эсереп күрһәтһен. Йәгеҙ әле, күмәкләшеп һыйлашыу мәлен ҡеүәтләп торайыҡ. Бына шулай, афарин! Ҡоҙаларыбыҙ һынатманы.

**2-се алып барыусы:** Табын күрке - йыуаса. Йыуасаны кем аса?

Бөгөн табыныбыҙҙа бер күркәм ризығыбыҙ күренмәй. Килен бешергән йыуасаны көтөп ултырыусылар инде таҡмаҡ әйтә башланы. Ә хәҙер йыуасаны алып киләбеҙ, бергәләшеп халыҡ көйө "Йыуаса"ны ла йырлашайыҡ, йыуасанан ауыҙ итәйек.

*"Йыуаса" көйө башҡарыла, бейеүсе ҡыҙ йыуасаны табын уртаһына килтерә һәм тәғәйен ҡоҙа-ҡоҙасалар, бүләк әйтеп, ризыҡты табынға тапшыра. Был арала "Көйһөҙ кейәү", "Сылбыр", "Ҡулдарыңдан танайым", "Булдыҡһыҙ" кеүек уйындар уйнатырға мөмкин.*

**1-се алып барыусы:** Ә хәҙер һүҙебеҙҙе йәштәребеҙгә: Азамат менән Наҙгөлгә бирәбеҙ. Азамат кәләшенең йыуаса бешергән наҙлы бармаҡтарын һөйөп, һәр береһенә иркә, һөйөү һүҙҙәре әйтһен.

*Кейәү кәләшенә матур һүҙҙәр әйтә. Ошо мәлдә йыр башҡарыла.*

**Алыш барыусы:** Ә хәҙер, хөрмәтле ҡоҙа-ҡоҙасалар, сихри эшләпә аҫтында һеҙҙе бергәләп бейергә саҡырам. Сихри эшләпә көй барышында уйынсылар тарафынан бер-береһенә тапшырыла бара һәм көй туктау менән кемдә эшләпә ҡалған, шул уйынсынан фантик алына. Биш-алты фантик йыйылғас, әйбер хужалары үҙ һөнәрҙәрен күрһәтә.

*Эшләпә менә уйын башҡарыла.*

**2-се алып барыусы:** Бергәләшеп уртаға йыйылғанда бөгөнгө тыуған йәш ғаиләнең ғаилә усағы йылынына һыйынырға саҡырабыҙ. Был усаҡты йәштәребеҙ ата-әсәләр менән бергәләп тоҡандыра һәм барығыҙҙы ла Азат Йыһаншин башҡарған "Күңел айым" (Ю. Үҙәнбаев музыкаһы, В. Аҡбашев һүҙҙәре) йыры аҫтында парлы бейеүгә саҡырабыҙ.

*Бейегәндә һәр парҙың ҡулында май шәм яна.*

**1-се алып барыусы:** Ғаилә усағында йылынғас, беҙ һеҙҙе өҫтәл артына аҡҡоштар тоғрологон, мөхәббәт символын хәтерләтеп биҙәлгән тәмле торт ашарға саҡырабыҙ. Был тортты бүлергә йәш кәләштең уңған ҡулдары кәрәк һәм һәр береһенә ошо тәмлекәстән ауыҙ итеү мотлаҡ.

*Торт киҫелә һәм табынға таратыла.*

**2-се алып барыусы:**
Алтын балдаҡ кейгән был көнөгөҙ
Һағындырыр тормош көткәндә.
Һаман да йәш, матур һеҙ, тиһендәр,
Алтын туйҙы байрам иткәндә.

Бәхетегеҙ тулып ташып торһон,
Мәңге бергә татыу торoғоҙ.
Изгеләрҙән изге теләк һеҙгә,
Ҡотло булһын йәшлек туйығыҙ.

Изге теләк, наҙлы һүҙҙән башҡа
Табып булмай затлы бүләкте
Беҙҙең өсөн бик тә ҡәҙерле һеҙ,
Бигерәк яҡын, бик тә кәрәкле.

Ошондай изге теләк менән һеҙҙе тормош һуҡмағына оҙатабыҙ. Бер йылдан - ситса, икенсе йылдан - ҡағыҙ, биш йылдан - ағас, ун йылдан - роза, ун биш йылдан - быяла, егерме йылдан - фарфор туйҙар билдәләгәндә бөгөнгө теләктәрҙең барыһы ла үтәлеп, һеҙ тормоштан һыналып, көмөш, ынйы һәм алтын туйҙарға елеп етегеҙ. Мөхәббәтегеҙ һүнмәһен, һүрелмәһен. Тормош һынауҙары һеҙҙе төрлө яҡлап тәрбиәләгәндә йәш ғаилә, мөхәббәт тураһында халыҡ фекере кәрәкле булыр.

*Ошонда егет менән ҡыҙҙың яҡындары алдан өләшеп бирелгән кәнәштәрҙе берәмләп әйтеп сыға.*

Һөйөү иҫертә - өйләнеү айныта.
Ҡыҙ бала - иртәгәһен ил-ана.
Алтын балдаҡҡа алданып ҡына кейәүгә сыҡмайҙар.
Аҡыллы уй - туйҙан һуң.
Уңған ҡатын - өй яҡтыһы.
Иркә һүҙ - имәндәй ирҙе лә бөгә.
Ҡыҙ саҡ - солтан саҡ , килен саҡ - олтан саҡ.
Ҡатын-ҡыҙ - ул һәр саҡ була бөйөк.
Ҡатын-ҡыҙға килешә тыйнаҡ булыу.
Тыйнаҡлыҡтан алда - йыйнаҡ булыу.

**2-се алып барыусы.** Хөрмәтле йәштәребеҙ! Гүзәл парҙарыбыҙ! Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә, тиҙәр. Был һүҙҙәрҙә, мәҡәлдәрҙә хаҡлыҡ та бар, дөрөҫлөк тә ярылып ята. Әйҙәгеҙ, ололарыбыҙҙың изге кәнәштәрен тотоп, фәһемле һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, ғаиләгеҙҙе изге сәғәттәрҙә иманлы көскә бағышлайыҡ. Бөгөнгө һеҙҙең өсөн бар хәстәрен күреп, тырышып торған ата-әсәләрегеҙгә рәхмәт һүҙҙәрен әйтер мәлдәр етте.

*Йәштәргә һүҙ бирелә.*

**1-се алып барыусы:**
Ҡайғыны ла, шатлыҡты ла
Бергә-бергә бүлегеҙ!
Был донъяла гөлдәр күркәм,
Өҙөлмәһен гөлөгөҙ.
Һеҙгә тағын беҙ теләйбеҙ
Бәхеттең мул өләшен:
Булғас, булһын гөлөгөҙҙәң
Бер... биш-алты емеше!...

Байрамығыҙ ҡотло булһын. Бөтәгеҙҙе лә хушлашыу көйөнә бейергә саҡырабыҙ.

Ҡоҙалар, ҡоҙасалар барығыҙға ла ҙур рәхмәт. Балаларығыҙ һеҙҙе һөйөндөрөп, шатлыҡтарға күмеп йәшәһендәр.

**Рәзилә ҠОТЛОГИЛДИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### ҠАЙҒЫЛЫ КӨН

Шулай бер көндө ҡышын үгеҙ егеп, 4-5 сана менән (күбеһе ҡатын-ҡыҙ) бесәнгә баралар. Кәбән башында Ғәләмәтдин ағай ҡар көрәп торған була. Һүҙҙән-һүҙ сығып, Заһира исемлеһе: "Ҡуй инде, ҡайғылы көндә лә эшләп йөрөйбөҙ", - ти. Ә Ғәлләмәтдин ағай: "Ни булды?" - тип һорай. "Һуң бөгөн, 21 ғинуар, Ленин үлгән көн бит", - тип яуаплай Заһира апай. Ғәлләмәтдин ағай кәбән башынан йығылып төшә лә, бесән дә тейәмәй ҡайтып китә. Конторағa килеп: "Ни өсөн алдан халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барманығыҙ, бөгөн бит ҡайғылы көн булған! Заһира ҡарындаш ҡапыл әйтеп, йөрәкте яра яҙҙы", - тип бәйләнә икән.

### АТЫМДЫ ЭҘЛӘЙЕМ

Беҙҙең ауылда Насыров Ғәлләмәтдин исемле ағай булды. Шулай 1931 йылдарҙа колхоздар дөйөмләштерелгәс һәр кем атын, һыйырын, башҡа әйберҙәрен колхозға бирә. Ғәлләмәтдин ағай бар ғүмерен малсылыҡта уҙғарҙы. Ул ваҡытта ла ат көтөүсеһе була торғайны. Бер көндө иртәнсәк II Моҡас ауылына сабып барып инә, ә халыҡ эшкә китергә йыйынған була. Ауыл халҡы: "Ғәлләметдин, ни булды? Нинә шулай өтәләнеп йөрөйһөң?" - тип һорай. Ғәлләметдин иһә: "Беҙҙең колхозда дөйөмләштерелгән малды кире алып бөттөк, мин атымды эҙләп килдем", - ти. Шунда уҡ халыҡ колхозға биргән малдарын, һабан, арбаларын таратып ала башлай. Был хәлдә тиҙ генә районға хәбәр итәләр. Райондан килеп, Ғәлләметдин ағайҙы ҡулға алалар. Һорау алғанда: "Ни өсөн Совет власына ҡаршы киләһең?" - тип һорайҙар. Ә Ғәлләметдин ағай бер ҙә бошонмай ғына: "Мин халыҡтың фекерен генә белергә теләгәйнем. Һеҙ халыҡ менән эшләмәйһегеҙ, халыҡ саҡ тора, агитация эше алып барылмай", - тип ҡотолоп ҡала.

### НОРМАҺЫН ТУЛТЫРА АЛМАҒАН

Элегерәк ҡыр йәнлеге күп булды. Мозафар ағай һунарсы ине. Ҡапҡан, тоҙаҡ ҡороп, төлкө, ҡуян аулай ине. Төйәләҫ буйында таллыҡта тауыҡ аҫылынып тора икән, шуны Мозафар ағай талға бәйләгән дә аҫтына төлкөгә ҡапҡан ҡорған.

Ул замандарҙа өй һайын 100 йомортҡаға һалым булды. Утынға тип китеп барғанда аҫылынған тауыҡты Ғәлләметдин ағай күреп ҡала. Эргәһендәге иптәше: "Ағай, был тауыҡ нинә аҫылынып тора?"- тип һорай икән. Ғәлләметдин ағай: "Бының ите лә ҡиммәт, йомортҡа һалымын үтәй алмай гәрлегенән аҫылынған", - тип ҡуя.

**Мөхәмәт ӘБДИСОВ.**
**Баймаҡ районы Әхмәр ауылы.**




### НЕ МОЖЕТ СӘМИҒУЛЛА ҮЛЕРГӘ

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Сәмиғулла тигән ярлы ғына кешенең 6 балаһы булған. Бер көн ауыл Советы рәйесенә килеп, "Сәмиғулла ағай үлеп ҡалған", тигән ауыр хәбәр еткергәндәр. Ауыл Советы рәйесе башын тотоп, иҫе китеп ултыра икән. Шунан: "Уның бит 6 балаһы бар, не может Сәмиғулла үлергә!" - тигән. Һәр кемгә үҙ ҡайғыһы: кемдер туғанының үлеменә ҡайғырып йөрөһә, рәйес теге ағайҙың балалары уға ҡарауға ҡаласаҡ, тип ҡайғырған, имеш.

### ӘҘЕЛГӘРӘЕВ АҒАЙ НИ ӘЙТЕР?

Ғүмер буйы ауылдан ситкә сығып йөрөмәгән бер егетте Бөйөк Ватан һуғышына алып китергә булғандар. Асҡарға военкоматҡа саҡыртҡандар тегене. Военком уға: "Иртәгә үк әйберҙәреңде алаһың да, әҙерләнеп киләһең - һуғышҡа китәһең", - тигән. Егет башын тырнап торған да, ауыл бригадирын хәтеренә төшөрөп: "Туктағыҙ әле, Әҙелгәрәев ағай ни әйтер бит", - тигән ти.

### АҠТҮШ ҺУҘЫЛҺАМЫ...

Ауылда мәрәкә генә бабай була торғайны. Бер көн иртән олатай һарыҡ һуйған да, түшкәһен соландағы бер сөйгә элеп ҡуйған. Әбейе ит бешерәйем тип сыҡһа, түшкә юҡ икән. Аптырап китеп: "Аһ, аһ... бабай, ҡайҙа булды ит?" - тиеүенә: "Анау йөрөгән Аҡтүш ашағандыр күп булһа", - тип, бәләкәс кенә сөүек этенә ымлаған ҡарты. "Ҡайҙан Аҡтүш ашаһын уны, буйы етмәй бит уның", - тип һүкрана икән әбей. Бабай, баяғы түшкәнең бер "яртығa" осҡанын йәшерергә тырышып, иҫе китмәй генә: "Һааай, һин уны белмәйһең - Аҡтүш һуҙылһа, һинән-минән оҙонораҡ була ул", - тигән.

### АНА!

Өс егет бағры балығына шырлыҡҡа китеп бара икән. Элек ул тирәлә айыу ҙа күп булған. Юл буйына айыу тураһында төрлө ҡурҡыныс имеш-мимештәр һөйләшеп киләләр, ти. Бер ваҡыт араларындағы берәүһе алға ымлап: "Ана!" - тип ҡысҡырған. Ҡалған икәүһе шул ерҙән ауыл яғына ҡарай торған да ҡаскан. Был егет аптырап тороп ҡалған да, тегеләрҙең артынан төшкән. Эй йүгерәләр, ти былар - өс саҡрам араны йүгереп үтеп, ауылға еткәндәр хәҙер. Ауыл осонда көтөп тора икән ике егет өсөнсөһөн. "Нимәгә ҡастығыҙ?" тип һораған йүгереп килгән ыңғайы өсөнсө егет. "Үҙең "Ана!" тип әйттең бит", - ти икән ҡасҡалаҡтар. "Мин һағыҙаҡ ояһы тора тип күрһәткәйнем бит", - тигән ти ҡурҡытыусы.

### ТАҘА НАМЫҪ

Ике егет район үҙәге Асҡарҙа вокзал кафеһы эсендә һуғышып киткән. Милиция хеҙмәткәрҙәре килеп етеп, был икәүҙе алып сығып баралар икән. Вокзал урамында ямғырҙан ҡалған ҙур күләүек яткан. Берәүһе тәртип һаҡсыларының ҡулынан ысҡынып, шул күләүеккә ырғыған да, биленән һыуға баткан да ҡуйған. Милиционерҙар тегене сығарып ҙа ине - төшөргә сикәнәләр икән. Йөрөгәндәр-йөрөгәндәр ҙә, сыҡмағас, китеп барғандар. Шуны ғына көткән "күләүек эйәһе" килеп сыҡҡан да: "Салбар бысраһа бысраны, зато намыҫ таҙа ҡалды", - тигән ти.

**Иҙрис НОҒОМАНОВ.**

***✓ Аллаһының дуҫы булыр өсөн нимә эшләргә кәрәк? Беренсенән, шәриғәт ҡушҡандарын үтәргә. Ислам диненең биш нигеҙе бар - Аллаһының берлегенә ышаныу, намаҙ, ураҙа, зәкәт биреү, хаж ҡылыу - шуларҙы үтәү.***

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙЫРЛАҒАНДА...
## ҡан баҫымы төшә

■ Пенсильвания тикшеренеүселәре иң файҙалы сәтләүек төрөн асыҡлаған. Башҡа сәтләүектәр менән сағыштырғанда, грек сәтләүеге файҙалыраҡ икән. Белгестәр белдереүенсә, грек сәтләүегендә антиоксиданттар күләме ике тапҡыр күберәк. Уның составындағы файҙалы матдәләр Е витаминына ҡарағанда 15 тапҡыр көслөрәк тәьҫиргә эйә. Грек сәтләүегендәге аҡһым да сифатлыраҡ, ул витаминдар, минералдар һәм күҙәнәкле туҡымаға бай. Был сәтләүектең берҙән-бер кире яғы - унда аллергия тыуҙырыусы елемсә һәм глютен күп. Белгестәр әйтеүенсә, башҡа төр сәтләүектәр ҙә организм өсөн бик файҙалы. Мәҫәлән, көнөнә 50 г фисташка ашау холестеринды кәметә, миндаль йөрәк ауырыуҙарын булдырмай, аҡыл ҡеүәһен үҫтерә. Кешью кальцийға, баҡырға, магнийға, тимергә, олеин кислотаһына бай. Бразилия сәтләүегендәге витаминдар иммун системаһын нығыта, простата биҙе эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай.

■ Йоҡлаған саҡта мотлаҡ утты һүндереп йоҡлағыҙ, юғиһә, үҙегеҙ ҙә һиҙмәҫтән, тәнегеҙҙең ауырлығы артасаҡ, тип иҫкәртә Огайо университеты ғалимдары. Неврологтар әйтеүенсә, һүрән генә ут яндырып йоҡлау ҙа яйлап хроник депрессияға килтереүе ихтимал. Баҡтиһәң, төндәге ут организмдағы матдәләрҙең химик балансына, хатта мейе структураһына йоғонто яһай.

■ Тель-Авив ғалимдары, коллективта хеҙмәткәрҙәр араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәт кешенең ғүмер оҙайлығына тәьҫир итә ала, тип раҫлай. 38-43 йәш арауығындағы хеҙмәткәрҙәр өсөн был бигерәк мөһим. Егерме йыл барған тикшеренеүҙәрҙә страховкалау, коммуналь хеҙмәттәр, һаулыҡ һаҡлау, финанстар өлкәһендә эшләгән 820 кеше ҡатнашҡан. Һөҙөмтәлә, хеҙмәттәштәр менән яҡшы мөнәсәбәт кешенең ғүмерен оҙайтыу һәләтенә эйә икәнлеге асыҡланған. Иң ҡыҙығы, етәксенең хеҙмәткәргә мөнәсәбәте насар булыуы ихтимал, иң мөһиме, социум уға терәк була икән, хеҙмәткәрҙең ҡандағы холестерин күләме лә, артериаль ҡан баҫымы ла, тән индексы массаһы ла нормала була.

■ Компьютер артында оҙаҡ эшләргә тура килһә, иң тәүҙә күҙҙәргә мөмкин тиклем әҙерәк зарар килтереүҙе хәстәрләргә кәрәк. Америка ғалимдары күҙҙәр өсөн иң зыянһыҙ компьютер шрифтын асыҡлаған. Эксперименттар күрһәтеүенсә, иң хәүефһеҙ шрифт тип Verdana асыҡланған. Хәрефтәрҙең иң оптималь варианты тип 10-12 пункт билдәләнгән. Белгестәр әйтеүенсә, Verdana шрифтында хәрефтәр аҫтан һәм өҫтән график штрихтар менән билдәләнмәй, шуға ла күҙҙәр аҙыраҡ арый. Табиптар шулай уҡ мониторға күҙҙәрҙе ҡыҫып ҡарамаҫҡа кәңәш итә.

■ Артериаль ҡан баҫымығыҙ күтәрелеп йонсотамы? Улайһа, гел генә үҙ алдығыҙға йырлап йөрөгөҙ. Бостондағы Гарвард медицина мәктәбе белгестәре ҡан баҫымын яйға һалыу өсөн ысынлап та йырларға кәңәш итә. Был асышҡа табиптар осраҡлы ғына юлыға. Дарыуҙар терапияһы ярҙамында пациенттың юғары ҡан баҫымы нормаға килмәгәс, табиптар уға йырларға ҡуша. 76 йәшлек ҡатын бер-ике йыр йырлағандан һуң уның ҡан баҫымы төшә. Әлегә белгестәр йырлауҙың йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшмәкәрлегенә тәьҫирен ныҡлап өйрәнә.

ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ

**Һуңғы йылдарҙа халыҡтың рухи аҙыҡҡа һыуһаған күңеле дингә тартыла. Ҡасандыр олатай-өләсәйҙәре ихтирамлап һөйләгән ҙур дин әһелдәре - ишандарҙы, суфый әүлиәләрҙе иҫкә ала, уларҙың онотолоп, юғалып бөтә яҙған ҡәберҙәрен төҙөкләндерә, зыярат ҡыла башланы. Бөтә ғүмерен халыҡҡа дин һәм белем таратыуға, тәрбиә ҡылыуға бағышлаған аҫыл заттарыбыҙҙың хеҙмәттәренең баһаһын көндән-көн нығыраҡ аңлайбыҙ. Ләкин "ишан", "суфый", "әүлиә" һүҙҙәре совет заманында кире, хатта мыҫҡыллау мәғәнәһендә йөрөһә, хәҙерге көндә ҡайһы бер дин әһелдәре лә был төшөнсәләргә үҙҙәренең ошондай уҡ мөнәсәбәтен һиҙҙерә. Әүлиә ҡәберҙәренә зыярат ҡылыуҙарҙы тыйырға тырышыусылар бар. Яңыраҡ Ауырғазы районының Ҡорманай ауылы мәсетенә бынан ике быуат элек йәшәгән суфый әүлиәһе Йәғәфәр ишандың исеме бирелде. Ошоно ла өнәп еткермәгәндәр булды. Ә бит был тантанала Бөтә Рәсәй Үҙәк диниә назараты мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин үҙе ҡатнашҡайны. Әлеге мәсьәләгә асыҡлыҡ индереү маҡсатынан беҙ мөфтөй Тәлғәт Тажетдин хәҙрәткә бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек:**



# ӘҮЛИӘЛӘР ҠӘБЕРҘӘРЕНӘ...
## табыныр өсөн түгел, хәйер-доға ҡылыр өсөн барабыҙ

**➔ Хәҙрәт, ислам дине суфый, ишандарға, әүлиәләргә ниндәй мөнәсәбәттә, мәсеттәргә уларҙың исемен биреү яраймы?**

- Бисмиллаһи-иррахмәни рахим. Беҙҙең китаптарыбыҙҙа Аллаһының берлегенә ышанған кешеләр бөтөнөһө лә әүлиә, Аллаһының дуҫы, тиелә. Аллаһының берлегенә ышаныу, ҡушҡандарын үтәү, тыйғандарынан тыйылыу донъяла ла, әхирәттә лә әҙәм балаһын Аллаһ ҡаршыһында юғары дәрәжәләргә күтәрә. Шуның менән бергә айырым кешеләр бар - улар үҙҙәренең изгелектәре, миһырбан шәфҡәтлектәре, ғәмәли ғибәҙәттәре менән Аллаһыға яҡынаялар. Бәйғәмбәребеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм улар тураһында айырым һөйләне, Ҡөрьән-Кәримдә лә әйтелә - аң була күрегеҙ: Аллаһҡа дуҫ булған кешегә донъяла ла, әхирәттә лә ҡайғы-хәсрәт тә, ҡурҡыныс та юҡ, тиелә. Хәҙис ҡудсийҙа, Аллаһы Тәғәлә әйтә: бер кеше Аллаһының дуҫтарын яҡын күрһә, ул миңә яҡын булыр, ләкин минең дуҫтарыма дошман булып торған булһа, ул бәндәгә мин дә дошман булырмын, тиелә.

Аллаһының дуҫы булыр өсөн нимә эшләргә кәрәк? Беренсенән, шәриғәт ҡушҡандарын үтәргә. Ислам диненең биш нигеҙе бар - Аллаһының берлегенә ышаныу, намаҙ, ураҙа, зәкәт биреү, хаж ҡылыу - шуларҙы үтәү. Шуның менән бергә хәрәмдәрҙән һаҡланыу, ярамаған эштәрҙән тыйылыу. Был - сусҡа итен ашамау, иҫерткес эсмәү генә түгел, янъялдан, ғәйбәттән, яла яғыуҙарҙан тыйылыу. Аллаһының дуҫы булам, тигән кеше ошо ҡағиҙәләрҙе үҙ итергә тейеш. Хәҙис ҡудсийҙа, Аллаһы Тәғәлә әйтә: әҙәм балаһы мин ҡушҡандарҙы үтәгәндән һуң да тағын ғибәҙәттәр ҡылып, миңә яҡынайыр, хатта мин уны һөйәрмен, уның күрер күҙе булырмын, атлар аҙымы булырмын, тотороҡлоғо булырмын. Уға дошман булғанға мин дә дошман булырмын, тиелә. Бына бындай кешеләр нәфел ғибәҙәттәр ҡыла, төндәрен дә намаҙҙарын тороп уҡый, тәһәрәтһеҙ йөрөмәй, һәр саҡ зекерҙә була. Шуның менән бергә улар - түҙемле, сабыр, кешеләргә бик мәрхәмәтле. Ошондай кешеләр ауылдарыбыҙҙа, ҡалаларыбыҙҙа һәр ваҡытта ла йәшәгән. Бөтә илгә, донъяға танылған Зәйнулла хәҙрәт Рәсүлиҙең күпме шәкерттәре булған! Тәҡүәлеге, изгелеге менән танылған. Ундай кешеләрҙе беҙ тауыш биреп әүлиәлеккә күтәрә алмайбыҙ. Ул иҫән ваҡытында уҡ үҙенең ғәмәлдәре, изгелектәре, кешеләргә мәрхәмәт-шәфҡәтлеге менән әүлиә булып танылa. Ә уның ысын әүлиә булғанлығы Аллаһының хозурында мәңгелеккә күскәндән һуң ғына билдәле була.

Ошондай кешеләр күп булған. Май айында ғына Тәтешле районы Күрҙем ауылында Ғабдрахман хәҙрәттең 150 йыллығын үткәрҙек. Ғүмер буйы халыҡҡа хеҙмәт иткән, дәрестәр биргән, әҫәрҙәр ҡалдырған. 1918 йылда уны большевиктар ҡылыс менән сабып үлтерә. Бөгөнгө көндә лә ундай кешеләр халыҡтың хәтерендә һаҡлана. Йәғәфәр ишан да ошондай заттарҙың береһе - кешеләрҙе дауалаған, күпме ғилем, мәғ-

НИКАХТАР КҮКТӘ ЯРАЛА

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -
## Ерҙәге ожмах сағылышы ул



### Ғаиләнең һәм йәмғиәттең гәлсәр шәме

**Исламда ҡатын-ҡыҙҙың роле ниндәй? Бөгөн ҡайһы бер сәбәптәр һәм алдатҡыс вәғәҙәләр арҡаһында күп ҡатын-ҡыҙ бәхетен йорттан ситтә эҙләй. Ҡатын-ҡыҙ ҡайҙа тыныслыҡ һәм бәхет эҙләргә тейеш?**

Аллаһы Тәғәлә ҡатын-ҡыҙҙы ир-егеткә ҡарағанда күпкә хислерәк итеп яралтҡан. Тойғолар тәрәнлеге һәм эмоциональ кисерештәр ҡатын-ҡыҙға Аллаһы Тәғәлә тарафынан һалынған нәҫелде дауам итеү һәм балалар тәрбиәләү кеүек мөһим бурысты үтәр өсөн кәрәк.

Бөгөнгө көндә ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙҙар араһында тиң хоҡуҡлылыҡ өсөн көслө көрәш бара. Аллаһы Тәғәлә ҡанундарына ҡаршы килгән был көрәш арҡаһында ҡатын-ҡыҙҙар ҡатын һәм әсә булыу тигән төп тәғәйенләнешен онотто, ә ғаиләләр тыныслығын юғалтты, ә йәмғиәт үҙенең ағзаларының кешелек йөҙөн юғалтыуынан тетрәнеп ҡалды.

Ҡатын-ҡыҙ менән ир-егеттең физик һәм рухи сифаттары, мәҫәлән, фактик һәм хоҡуҡи хоҡуҡтары кеүек, баштан уҡ бер иш түгел. Бөтә нәмәлә лә тигеҙ хоҡуҡлылыҡ түгел, ә хоҡуҡтарҙа һәм вазифаларҙа тигеҙлек мөһим.

Аллаһы Тәғәлә йәмғиәттәге позицияларына ҡарап, ир-егет менән ҡатын-ҡыҙға төрлө үҙенсәлектәр биргән, уларҙы бер-береһенән физик һәм рухи сифаттар менән айырған. Ошо сифаттар тулы кимәлдә камиллашһа ғына ир-егет менән ҡатын-ҡыҙ бөйөк маҡсаттарға - ғаилә именлегенә ирешә алыр. Был үҙ сиратында бөтә йәмғиәт именлегенә алып килә.

Ҡатын-ҡыҙҙың камиллашыуы Аллаһы Тәғәлә уға биргән яҡшы холоҡ сифаттарын һаҡлау һәм үҫтереү юлы менән килә. Әгәр ҡатын-ҡыҙ үҙенең күркәм рухи сифаттарын Исламға ҡаршы килгән эштәрҙә күрһәтһә, шулай

лүмәт ҡалдырған, күпме шәкерттәре уның эшен дауам иткән. Шуға күрә уларҙың исемдәрен мәсеттәргә биреү - күркәм бер йола. Был - халыҡтың хәтере, тигән һүҙ. Бәйғәмбәребеҙ /с.ғ.с/, донъянан үткәндәрегеҙҙең изгелектәрен иҫкә алығыҙ, кәмселек-хаталарын онотоғоҙ, тигән. Был - әүлиәләргә табыныу түгел, уларҙың хәтерҙәрен күңелдә һаҡлау, уларҙың тормошонан, эшләгән эштәренән, һөйләгән һүҙҙәренән үрнәк алып, үҙебеҙ ҙә шул матур сифаттарҙы кәсеп итергә тырышыу.

Ҡайһы берәүҙәр әүлиәләрҙең ҡәберҙәренә барыуҙы бидғәт /шәриғәт сиктәренән сығыу, арттырыу/ тип, табыныу итеп ҡарай. Был - һаташыу. Табынырға һис ярамай, әлбиттә. Фәҡәт Аллаһтан ғына туранан-тура ярҙам һорарға тейешлебеҙ. Ләкин "Фатиха", "Әл-ихлас" сүрәләрен уҡып, уларҙың рухтары шат булһа ине, тип доға ҡылыу, иҫкә алыу - шәриғәткә тап килә. Бәйғәмбәребеҙ /с.ғ.с/ әйтә, мин һеҙҙе ҡәберҙәргә барыуҙан элек тыя инем /мәжүсиҙәр ваҡытында ҡәберҙәргә барып табыныуҙар, мәйеттәрҙән ярҙам һорауҙар булған/, хәҙер имандарығыҙ сынықты, ҡеүәтләнде, шуға күрә зыяратҡа барығыҙ, унда барыу үлемде иҫкә төшөрөр, ти. Үлемде иҫкә төшөргәс, әҙәм балаһы мәңгелеккә күсеүгә, Аллаһының хозурына ҡайтыуға әҙерләнә, гонаһтарҙан, ярамаған эштәрҙән тыйыла башлай.

➔ **Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Совет дәүерендә халыҡ үҙенең дини остаздарынан, ғилем биреүсе, тәриҡәт таратыусы ишан әүлиәләрен иҫләп, ҡәҙер ҡылыуҙан мәхрүм ителде, уларҙың изге ҡәберҙәре сәсеү ерҙәре аҫтында ҡалды, һөрөп ташланды, таштары, тимер текмәләре урланды. Бөгөн халыҡ ҡасандыр юҡ ителгән изге ҡәберҙәрҙе эҙләп таба, таш ҡуя, тәҙәкләндерә, шишмәләрен тәртипкә килтерә. Ләкин үҙҙәрен "дин әһеле" тип иҫәпләгән ҡайһы бер бәндәләр /ваһһабистар ҙа тиҙәр уларҙы/ был ғәмәлдәрҙе "исламға ҡаршы эш" тип баһалай һәм ҡәберҙәрҙең кәртә-таштарын ватып-емереп ташларға ла тартынмай. Асылда кем һуң улар? Ислам диненә һуҡырҙарса бирелгән фанаттармы, әллә, киреһенсә, исламға ҡаршы эш алып барыусылармы?**

- Әйткәнемсә, беҙ хөрмәтлә дин әһелдәренең ҡәберҙәренә табыныр өсөн түгел, хәйер-доға ҡылыр өсөн барабыҙ. Улар - остаздар. 1917 йылғы революциянан һуң ун йыл самаһы ғына иркенлек бирелде лә, шунан һуң мәсеттәрҙе вата башланылар, ошондай әүлиәләрҙең ҡәберҙәрен емерҙеләр, ошоноң менән үҙҙәренсә динде бөтөрөргә аҙапландылар. Ләкин дин барыбер халыҡтың хәтерендә ҡалды бит, Аллаға шөкөр. Динһеҙҙәр дәүере 70 йылдан артыҡ дауам итһә, хәҙер 18-20 йыл эсендә 100-ләгән генә түгел, меңләгән-меңләгән мәсеттәр асылды. Халыҡтың тырышлығы, эшҡыуарҙарҙың ярҙамы, дәүләт ойошмаларының ярҙамы менән эшләнә былар.

Йыйылышыу насармы ни? Бәйғәмбәребеҙ /с.ғ.с./, Аллаһы раббым минең өммәтемде һаташыу-аҙашыуға йыймаҫ бер ҡасан да, ти. Ошондай йыйындарҙа кәңәшләшәбеҙ, бер-беребеҙҙән үрнәктәр алабыҙ, аят-доғалар уҡып, тәүбәләр ҡылабыҙ. Бында иман ҡеүәтләнеүҙән башҡа бер нәмә лә юҡ. Кирегә тартыусыларҙың /ваһһабистармы, башҡаларму/ ғәйеп итеүҙәренең төбөндә шул ята: улар, мәйеткә доға ҡылыуҙың файҙаһы юҡ, үлде лә бөттө, тиҙәр. Ә был һүҙҙәрҙе бынан 70 йыл элек динһеҙҙәр, атеистар, коммунистар һөйләнә. Уларҙың һүҙе менән быларҙың һүҙе бер булып сыға. Икеһе лә бер тамырлы. Ә бәйғәмбәребеҙҙән /с.ғ.с./ шундай һүҙе бар: әҙәм балаһы йән бирһә, донъянан үтһә, өс төрлө эштән башҡа бөтә ғәмәле киҫелә. Беренсеһе: иҫән ваҡытында дөйөм кешелек донъяһы файҙаланырлыҡ берәй эш эшләп ҡалдырған булһа - ағас ултыртҡанмы, ҡойо ҡаҙығанмы, күпер һалдырғанмы, мәҙрәсә дауамына ярҙам иткәнме - үҙе донъянан үткәс тә, был эштәрҙән әжер-сауабы килеп торор. Икенсеһе: үҙ артынан файҙаланырлыҡ ғилем биреп ҡалдырһа, йә бер һөнәр өйрәткән булһа, шуның менән файҙаланған һайын үҙ әжере-сауабы артыр. Өсөнсөһө: үҙ артынан изге, хәйерле балалар ҡалған булһа, улар доға ҡылған һайын, әжер-сауабы барыр...

Ҡөрьән-Кәримдә лә: "Йә раббыбыҙ Аллаһ, беҙҙең гонаһтарыбыҙҙы кисерһәң ине һәм беҙҙән элек иман менән үткәндәрҙе лә ярлыҡаһаң ине. Күңелдәребеҙҙә имманлы кешеләргә төйөр ҡылмаһаң ине",- тиелә. Был һүҙҙәр үҙе үк мәңгелеккә күскәндәргә доға ҡылырға кәрәклекте һөйләп тора.

Шуға күрә үҙ заманында бөтә ғүмере буйы халҡыбыҙға дин өйрәткән, файҙалы ғилемдәр биреп ҡалдырған хәҙрәттәрҙе, ишандарҙы иҫкә алыу, ҡәберҙәрен тәҙәкләндереп, зыярат ҡылыу, рухтарына бағышлап аят-сүрәләр уҡыу изге ғәмәлдәрҙең береһе...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**9 июлдә Баймаҡ районының Муллаҡай ауылында атаҡлы дин әһеле Ғабдулла Сәидиҙең (Ғабдулла бин Сәйет Әл-Булғари әл-Бөрйәни әл Һаҡмари) тыуыуына 175 йыл тулыуға арналған йыйын үтә. Сара иртәнге 10 сәғәттә башлана. Ғабдулла Сәиди үҙ заманының бөйөк шәхестәре Зәйнулла Рәсүлев, Мифтахетдин Аҡмулла, Шәмсетдин Зәки, Ғәли Соҡоройҙар менән аралашҡан, фекерҙәш булған ишан. Уның шәхесе тураһында башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе, Башҡортостан автономияһына һәм Рәсәй федерализмына нигеҙ һалған сәйәси эшмәкәр һәм донъя кимәлендә билдәле ғалим Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең "Хәтирәләре"ндә шулай тип тип яҙа: "Бохарала ғилем алған Ғабдулла мулла ислам дине даирәһендә бик абруйлы, ғәрәп һәм фарсы телдәрендә шиғырҙар яҙған, йәштәрҙең уҡытыусыһы, тәрбиәсеһе, остазы булараҡ оло хөрмәткә лайыҡ шәхес ине". Шулай итеп, Баймаҡ районында үтәсәк йыйынға рәхим итегеҙ. Ә ишан тураһында материалды гәзитебеҙҙең киләһе һанында уҡығыҙ.**



**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

уҡ үҙенең намыҫын һәм абруйын ҡурҡыныс аҫтына ҡуйһа, ул үҙенең ҡиммәтен, күркәмлеген, әхлағын һәм аҡыл зирәклеген юғалтасаҡ, һуңғы һөҙөмтәлә быныӊ тотош йәмғиәткә зыян килтереүе ихтимал. Шул уҡ ваҡытта лайыҡлы йәшәү рәүеше алып барған ҡатын-ҡыҙ үҙе йәшәгән йәмғиәтте ожмахҡа әйләндереүгә һәләтле. Ҡатын-ҡыҙ ғаиләнең һәм йәмғиәттең гәлсәр шәме кеүек. Кешелек тарихына күҙ һалһаҡ, беҙ ҡайһы бер арҙаҡлы ҡатын-ҡыҙҙарҙың бөтә цивилизация үҫешенә тәьҫир иткәнен күрәбеҙ. Шулай уҡ көсһөҙ зат вәкилдәре айырым дәүләттәрҙең һәм халыҡтарҙың һәләкәтенә лә сәбәпсе булған.

Ҡатын-ҡыҙ бәхете - үҙенең намыҫын һаҡлау һәм ғиләнен ҡурсалау. "Йәннәт - әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында" хәҙисе әсәләргә шундай ҙур шатлыҡлы бер хәбәр булып тора. Яҡшы әсә - ғаилә бәхетенең сығанағы, илаһи көс менән асылған тынысылыҡ ҡосағы, ғаилә ағзаларына мәрхәмәтлек усағы. Унда Аллаһы Тәғәләнең "мәрхәмәтле" һәм "рәхимле" тигән сифаттары сағылған.

Был донъяла ихтирамға һәм һөйөүгә башта беҙҙе үҙенең ҡарынында, унан ҡулдарында һәм һуңынан ғүмере буйы үҙенең йөрәгендә һаҡлап йөрөгән әсәнән дә лайыҡлыраҡ бер кем юҡ. Иңендә йорт мәшәҡәттәре һәм балаларҙы тәрбиәләү йөгөн йөрөткән ҡатын-ҡыҙ сикһеҙ һөйөүгә, тәрән хөрмәткә һәм ғүмерлек рәхмәткә лайыҡ.

Мәүләнә (радиаллаху анху) әйткән: "Әсәләргә иғтибарлы бул! Юғиһә, әгәр әсәләр тыуым ваҡытында ғазапланмаһа, сабыйҙар ҙа был донъяға тыуа алмаҫ ине".

Бөйөк дин әһеле һәм ислам ғалимы Имам Әғзәм (радиаллаху анху) ғәҙеллек өсөн Бағдатта хөкөм итеүсе вазифаһынан баш тартҡан. Халиф Абу Джаффар Мансур уны төрмәгә ябырға һәм ҡамсы менән һуҡтырырға бойороҡ биргән. Көн һайын ул һуғыу иҫәбен арттыра барған. Шулай ҙа түҙеп торғоһоҙ яфалар кисерһә лә, ғалим, тулҡынланып, үҙенең әсәһе тураһында уйлаған: "Минең яфаларым тураһында белһә, әсәйемә нимә буласаҡ?" Ул үҙенең дуҫтарына былай тип еткергән: "Аллаһ ризалығы өсөн минең әсәйем был турала белмәһен. Ул минең ғазаптарыма түҙеп тора алмаясаҡ һәм үләсәк! Ә мин уның күҙ йәштәрен күтәрә алмайым!" Был ваҡиға әсәләргә ҡарата һөйөүҙең сағыу миҫалы булып тора.

Икенсе бөйөк ислам ғалимы Баһауетдин Нәҡшбанд (радиаллаху анху) әсәләргә ҡарата сикһеҙ мөхәббәттән өлгө күрһәтеп: "Беҙҙең ҡәберҙәребеҙгә зыярат ҡылырға теләүселәр башта беҙҙең әсәйҙәребеҙҙең ҡәберенә барып килһен!" - тигән.

Билдәле таджик-фарсы Абдуррахман Мола Джами: "Нисек үҙ әсәйеңде яратмаҫҡа мөмкин, ул бит башта мине үҙенең ҡарынында, һуңынан ҡулдарында алып йөрөгән һәм бөтә ғүмере буйы үҙенең йөрәгендә алып йөрөйәсәк!" - тигән.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Аҙағы).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Өндәге төш - сикһеҙ һөйөүгә юл

"Мин кешелекте яратам. Кемде күрә алмайым, улар ҙа - кеше". Былай тип әйтеүсе, моғайын, шаяртҡандыр. Үкенескә күрә, донъяға былай ҡараш киң таралған. Кем өсөндөр һөйөү - бысраҡ һүҙ. Ундайҙар өсөн ысынбарлыҡ шулай, сөнки улар быға ныҡлы ышана. Икенселәр өсөн һөйөү - кешегә күрһәтергә ярамаған тойғо. Шуға ла улар уны башҡаларға күрһәтеп бармай.

"Мөхәббәт донъяны хәрәкәткә килтерә", тигән һүҙҙәр хәҡиҡәткә яҡын. Мөхәббәтһеҙ Йыһанда тартыу көсө лә, гравитация яланы ла, Ҡояш системаһы һәм галактикалар ҙа, енси бәйләнеш тә булмаҫ ине.

Был яҙмалар тормошоғоҙҙо мөхәббәт менән тултырырға ярҙам итер. Ул тәндә көсөргәнештән арындырған халәттә уй-хыялдарығыҙҙың эшмәкәрлегенә генә ҡайтып ҡалмай: күнекмәләрҙең мөһим өлөшө булып өндәге төш тора. Улар хатта өндәге төш сигенән сығып, үҙ-ара яҡшы физик һәм метафизик мөнәсәбәттәр булдырыуҙың айырым ысулдарына ла тәьҫир итә.

Бында төп мәл булып беҙ йыш ҡына урап ҡайтаҫаҡ бер хәҡиҡәт тора. Уның асылы шунан ғибәрәт: ни тиклем күберәк мөхәббәт ебәрһәң, шул тиклем уҡ урап ҡайтыр. Ә хәҙер тәү ҡарашҡа мөхәббәт алыу менән бер ниндәй уртаҡлығы ла булмаған кеүек күренгән аҙымды яһайыҡ - уны бүләк итергә өйрәнәйек.

## Һөйөүҙе күрһәтеүҙә ауырлыҡ тыуҙырған йәшерен сәбәптәр

Берберҙәр төрлө илдәрҙә, Мысырҙан башлап Атлантика ярҙарына, Сахара сүллегенән Урта диңгеҙгә тиклем территорияла йәшәһәләр ҙә, азатлыкты ныҡ баһалаған һәм үҙҙәрен башҡа халыҡтар контролләүенән ҡасҡан. Ҡасандыр уларҙың үҙҙәренең теле булған, шулай ҙа ниндәй илдә төпләнһә, шул халыҡтың телендә һөйләшкәндәр, тимәк, башҡа халыҡтарға ла ихтирамлы булғандар.

Бер ваҡыт Төньяҡ Африка буйлап сәйәхәт итеүсе сәйәхәтсе бер бербер менән осраша. Сәйәхәтсе Гавая утрауҙарынан була һәм ул берберҙарҙың боронғо теле гавая халҡының теленә оҡшаш булыуына аптырай. Ә Гавая утрауҙары менән теләһә ниндәй бәйләнеш һөйөүҙе сағылдыра, сөнки гавая телендә кеше "мин һине яратам" тимәйенсә, һаулыҡ та һораша, хушлаша ла алмай. Сөнки "алоха" һүҙе унда "мөхәббәт", "һаумыһығыҙ", "һау булығыҙ" тигәнде аңлата. Әгәр беҙ Гавая утрауҙарында тыуған булһаҡ, һөйөүебеҙҙе белдерергә һис ҡамасаулыҡ булмаҫ ине. Үкенескә күрә, беҙ унда тыумағанбыҙ һәм күптәребеҙҙә был йәһәттән ҡапма-ҡаршылыҡтар тулып ята.

Һеҙ Аллаһ тарафынан барлыҡҡа килтерелгәнһегеҙ, тимәк, уның сағылышы булып тораһығыҙ. Әммә бер нисә йылдан һуң һеҙ ата-әсәгеҙҙән, башҡа кешеләрҙең сағылышына әйләнәһегеҙ. Һуңынан, тирә-яҡтағыларға һуҡранғанда, бала саҡта һеҙгә ниндәй мөнәсәбәттә булғандар, шулай була башлайһығыҙ. Хатта шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатлайһығыҙ. Бала һөттө түкһә - "Йүнһеҙ!", түтәл тапап үтһә - "Анра!", уйынсығын ватһа - "Ахмаҡ!" тиһегеҙ. Шулай итеп, үҙегеҙҙең образығыҙҙы тыуа. Һәм һеҙ тирә-яҡтағыларҙы үҙегеҙҙең кимәлегеҙгә төшөрөп, улар менән тиң булырға тырышаһығыҙ. Бында атаәсәгеҙҙе ғәйепләргә ашыҡмағыҙ, һеҙгә бары тик ҡулсаны өҙәргә генә кәрәк. Был бик мөһим, сөнки ул һеҙгә тирә-яҡтағыларҙың мөхәббәтен тойорға ҡамасаулай. Бәлки, коллегаларығыҙ яратмағанға, етәксегеҙ кешегә һанамағанға, яҡындарығыҙ онотҡанға үҙегеҙ ғәйеплелер. Был һеҙгә оҡшаймы? Әлбиттә, юҡ.

**Роберт СТОУН.**



## 4 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Хиромант. Линии судеб", 1-я серия. Сериал
22.30 "Мозг. Перезагрузка". Док. фильм
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Борджиа", 5-я серия. Сериал
00.50 "Великолепный"
02.45, 03.05 "Джошуа"
